ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 июль (майай) 2021

№28 (966)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Утыҙ йылды ҡайҙан алырға?**




2-3

**Өфөнөң мәҙәни ҡатламы ғына ла...**



уның 1600 йыллыҡ йәшен билдәләй 8-9

**Малай саҡта...**



һәр кем шулай шәпләнә 11

**Беҙ үҙебеҙ төрлө-төрлө...**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Башҡортостан донъя кимәлендәге был мәҙәни сарала донъя кимәлен күрһәтеүгә өлгәште, ти ҡунаҡтар һәм тамаша ҡылыусылар...

***Тамара ПУРТОВА, Василий Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт Халыҡ ижады йорто директоры, CIOFF-тың Рәсәй милли секцияһы президенты:*** Был ысынлап та шулай. Башҡортостандың Фольклориаданы асыу тантанаһы беҙ бығаса күргән барлыҡ олимпия уйындарының "танауына сиртте". Өфө бөгөндән Олимпиаданы ҡабул итә ала һәм уға бөтөн донъя һоҡланасаҡ ҡына. Башҡортостан лидерҙар рәтендә булды һәм шулай булып ҡала ла. Ауыл клубтарын ғына алғанда ла, һеҙҙә уларҙың һаны 2 меңдән ашыу - бындай күрһәткес Рәсәйҙең бер генә төбәгендә лә юҡ. Һәм был бик мөһим, сөнки бөтөн нәмә ошо ауыл кимәлендәге мәҙәниәт усаҡтарынан башлана. Беҙ Республика Башлығы Радий Фәрит улына бик тә рәхмәтлебеҙ. Эйе, "ҡараңғы, ҡараңғы" тип зарланып ултырырға мөмкин, шул уҡ ваҡытта шәм яндырырға ла була. Әгәр Башҡортостан Башлығының ихтыяры булмаһа, беҙ был "тауҙы" урынынан ҡуҙғата алыр инекме икән? Үҙенә шундай яуаплылыҡ алып, ошонда йыйылған донъя йәмәғәтселеген таң ҡалдырған кешеләр булыуы һоҡландыра. Мин тамаша ваҡытында түҙмәнем, видеолар яҙҙырып, ғаиләмә, коллегаларыма ебәрҙем.

Сараны асыу тантанаһы Рәсәй Федерацияһы кимәле генә түгел, ә, ысынлап та, донъя кимәлендәге тамаша булды. Бер ниндәй либретто ла кәрәкмәй - нисек итеп Ер барлыҡҡа килеүе, нисек итеп уға батыр килеүе, уның ҡаршы торған көстәрҙе еңеүе һәм башҡа тарихи ваҡиғалар һүҙһеҙ ҙә аңлашылып торҙо. Тамаша бер ниндәй аңлатмаһыҙ ҙа аңлашыла икән - был инде режиссураның иң юғары нөктәһе тигән һүҙ.

Икенсе көндө өс ҙур акция үтте, сөнки беҙ булғанды популярлаштырыу, коллективтарҙың концерттары, тамашаларын күрһәтеү генә түгел, ә етди тикшеренеү һәм методик эштәрҙе лә алға һөрҙөк. Битлектәр күргәҙмәһе, уларҙы эшләү материалы, эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, "Оҫталар ҡалаһы" кәсепселек сауҙа-күргәҙмәһе Өфө, Башҡортостан халҡы менән танышыу, шул уҡ ваҡытта бер-беренә үҙенсәлекле продукция етештереү технологияһы менән бүлешеү урыны ла булды. Һәм, әлбиттә, конференцияла беҙ донъя халыҡтарына Рәсәйҙәге мәҙәниәттең күп төрлөлөгөн күрһәтә алдыҡ. Фольклориаданың талаптары буйынса, бер илдән бер генә коллектив ҡатнашырға тейеш, әммә конференцияла беҙ башҡорттарҙың, дағстандарҙың, чечендарҙың, алтайҙарҙың һәм Бүрәт республикаһында йәшәгән старообрядсылар-семейскийҙар мәҙәниәтен дә күрһәтеүгә өлгәштек һәм уларҙы башҡарыусылар йыйылыусыларҙың ихлас хуплауына лайыҡ булды. Фольклориада тәүге аҙымдарынан уҡ үҙенең масштабын күрһәтте һәм беҙҙең артабанғы бурыс - бөгөн эшләгән эштәрҙең мәҙәни-ара мөнәсәбәттәр именлеге хаҡына уңышлы дауам итеүенә өлгәшеү.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ДОНЪЯ ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ БЕРЛӘШЕҮ ҺӘМ...

## мәҙәни мираҫы менән уртаҡлашыу өлгөһө был!

**Донъялағы эпидемиологик хәлгә ҡарамаҫтан, ошо көндәрҙә республикабыҙ Ер шарының 37 иленән төрлө халыҡтар вәкилдәрен ҡаршы алды. Оло яуаплылыҡ талап иткән һәм күптән көтөлгән сара - VI Бөтә донъя фольклориадаһына баш ҡаланың "Өфө-Арена" боҙ һарайында тантаналы старт бирелде.**



(Дауамы 6-16-сы биттәрҙә).

12+

ТУҠТА, МӘЛ!

# БЕҘҘӘ БАЙРАМ!












ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡортостан донъя кимәлендәге был мәҙәни сарала донъя кимәлен күрһәтеүгә өлгәште, ти ҡунаҡтар һәм тамаша ҡылыусылар...***

***Филипп БОССАН, CIOFF президенты:*** Мин Өфөгә алтынсы тапҡыр килдем һәм ул минең өсөн икенсе тыуған йортома әйләнде. Сараны асыу иҫ киткес булды. Икенсе көнөнә иртән мин Фольклориадаға килгән коллективтар менән осраштым, уларҙың барыһы ла тамашанан алған ыңғай хис-тойғолары менән бүлеште. Тәжрибәмдән сығып әйтәм, ә мин дүрт тапҡыр бындай сараны асыуҙың шаһиты булдым - Өфөләге тамаша мөғжизә, мин күргән тамашаларҙың иң яҡшыһы булды. Уның ниндәйҙер бер мәлен генә айырып әйтеп тә булмай, хатта күҙҙәремдән йәш сыҡты. Тамаша барышында "Невероятно!" тип күпме ҡабатлағанмындыр, әммә ошо һүҙ телемдән төшмәне. Һуңғы тапҡыр ҡасан шундай көслө хис-тойғо кисергәнемде иҫләмәйем. Ысынлап та был киң күләмле шоу булды.

Фольклориадала миңә бигерәк тә дуҫлыҡ, дуҫтарса мөнәсәбәт оҡшай һәм был - кешеләр менән дуҫтарса мөнәсәбәттәр ҡороу аралашыуыбыҙҙың төп маҡсаты булып тора. Өфөлә эшлекле һәм эш һөйөүсән команда төҙөй алдыҡ. Шулай ҙа һеҙҙең иң ҙур байлығығыҙ - ул Башҡортостандың һоҡланғыс халҡы.

Ике йыл мәҙәниәт өлкәһендә бер ниндәй халыҡ-ара сара булманы һәм был тәүгеһе. Милли кейемдәр парадында һеҙ парад барышында бейегән коллективтарҙы күрҙегеҙ, был уларҙың бында ни тиклем ашҡынып килгәнен раҫлай. Парад матур шоу булды. Әлбиттә, сиктәр ябыҡ, сиктәрҙе сығып йөрөргә ярамай, әммә беҙ Өфөлә бик күп бейеү, вокал, музыкаль коллективтарҙы бергә йыя алдыҡ. Һәм, пандемияға ҡарамаҫтан, һеҙ быйылдың тарихта иң яҡшы Фольклориада булырына ышанырһығыҙ. Мин бары тик сараларҙың ниндәй юғары кимәлдә ойошторолғанын күреп, "Афарин, ойоштороусылар! Афарин, республика!", "Афарин, Рәсәй Федерацияһы!" тип кенә әйтәм.

***Радий ХӘБИРОВ, Башҡортостан Республикаһы Башлығы:*** Үҙ ғүмеремдә мин бындай иҫ киткес шоу күргәнем юҡ ине әле. Фольклориаданы асыу тантанаһы юғары интеллектуаль, бай йөкмәткеле булды. Әлбиттә, был еңел бирелмәне, беҙ биш йыл әҙерләндек һәм һуңғы ике йылда бер туҡтауһыҙ эш алып барҙыҡ. Сараны үткәреү буйынса яуаплылыҡты үҙ өҫтөбөҙгә алдыҡ. Эпидемиологик хәл ябайҙарҙан түгел, әммә бөтә талаптар, ҡағиҙәләр үтәлде һәм Фольклориаданы тейешле кимәлдә уҙғарырбыҙ, Башҡортостан халҡын ҡыуандырырбыҙ, тиғән ышаныстамын.

Фольклориада - ул байрам сараһы ғына түгел, халыҡ дипломатияһы ла бит. Шул хаҡта ҡайһы саҡ онотоп китәбеҙ кеүек. Бөгөн ян-яҡтан һәр төрлө агрессия янағанда, беҙҙе ниндәй генә сиктәр айырып тормаһын, ниндәй генә диндән йәки милләттән булмайыҡ, тыныслыҡта һәм татыулыҡта йәшәгебеҙ, бәхетле булғыбыҙ килә. Фольклориада тап кешелекте изгелек һәм яҡшылыҡ хаҡына берләштерә.

Мин Фольклориаданы 1957 йылда Мәскәүҙә үткән Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестивале менән сағыштырам. Ул ваҡытта илдәр бер-береһе менән аңлау таба алмағанда, йәштәр үҙ-ара аңлаша. Бөгөн дә беҙ шундай ыңғай һөҙөмтә алырбыҙ тип өмөтләнәм. Республика Фольклориадаға бик ентекле һәм ижади ҡараштан сығып, үҙенсәлекле әҙерләнде һәм уны барлыҡ кешеләр өсөн матур байрам итергә тырышты. Донъя буйынса меңдәрсә кеше был сараны телевизор экрандары һәм онлайн-форматта ҡарар тип ышанам.

БЫНАҒАЙЫШ!

# УТЫҘ ЙЫЛДЫ ҠАЙҘАН АЛЫРҒА?




**Юғары иҡтисад мәктәбенең яңыраҡ булып үткән Халыҡ-ара конференцияһы Рәсәйҙә пенсия өлкәһендә үҙгәрештәрҙең яңы варианттарына арналды.**

Мәғлүм булыуынса, илдә пенсия һәм пенсионерҙар мәсьәләһе - иң ҡатмарлы һәм йырып сыҡҡыһыҙ проблемаға әүерелде. Шуға күрә конференция эшен ҡайһы бер эксперттар уйынлы-ысынлы Рәсәйҙең "ауырыу Пенсия фондын дауалау буйынса консилиум" тип атаны. Шулай тип әйтерлек тә: нисә йыл инде хәҙер илдә пенсия тәьминәте мәсьәләһе тағатыла алмаслыҡ йомғаҡ рәүешендә. Ул хәҙер бик буталсыҡ һәм ҡатмарлы башватҡыстан һис кәм түгел. Илдең Финанс, Хеҙмәт министрлыҡтары, Пенсия фонды һәм хөкүмәттең социаль сәйәсәт чиновниктары нисә йылдар инде хәҙер береһенән-береһе шаңҡытырлыҡ сейле-бешле реформалары һәм ахыр сикке - халыҡ мәнфәғәтенә ҡаршы йүнәлтелгән нигеҙһеҙ үҙгәрештәр уйлап сығарып, кеше башын ҡатыра. Пенсияның тупланма өлөшөн юҡҡа сығарыу, иҫәпләүҙең балл формулаһын индереү, пенсия йәшен арттырыу... Тағы нимәләр көтә беҙҙе был өлкәлә?

Сиратта тағы ла хәтәрерәк пландар ҡорола. Шуларҙың береһе - пенсия туплауҙы кешенең үҙ иңенә ауҙарыу. Хәҙер Рәсәй граждандары үҙ киләсәген үҙе ҡайғыртып, йәғни үҙ теләктәре менән Пенсияның тупланма өлөшөнә аҡса күсереп барырға тейеш булып сыға. Дәүләт фәҡәт астан үлмәслек - һыныҡ икмәклек кенә ярҙам итә ала, ә инде ҡарт көнөндә ана шул икмәгенә май һылап ашарға теләһәң - рәхим итеп тупланма иҫәбенә аҡса күсереп бараһың. Эксперттар фекеренсә, был бик ышанысһыҙ юл: тупланма аҡсаһының тейелгеһеҙлегенә бер кем гарантия бирә алмай. Рәсәйҙә, үҙегеҙ беләһегеҙ, ха-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты 6 йәштән 18 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған 10 мең һум аҡса түләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан халҡы ошо аҡсаны алыу өсөн 15 июлдән Дәүләт хеҙмәттәре порталында ғариза бирә ала. Был түләүгә балалар алты йәштән башлап, хатта һаулыҡ торошо буйынса быйыл мәктәпкә бара алмағандар ҙа, хоҡуҡлы.

✓Донъяла барлығы 185 миллион кеше COVID-19 йөҡторған, уларҙың 4 миллиондан артығы донъя ҡуйған. Күберәк АҠШ-та, Һиндостанда, Бразилияла, Францияла һәм Рәсәйҙә ауырыйҙар. Рәсәйҙә барлығы 5 млн 733 ауырыу осрағы теркәлгән, һуңғы тәүлектә - 25766 осраҡ. Вафат булыусылар һаны 141 меңгә етте, 726 осраҡ - һуңғы тәүлектә. Вирусологтар мәғлүмәте буйынса ҡайһы бер кешеләр өсөнсө тапҡырға ауырый.

✓9 июлгә Башҡортостанда 42 936 яңы коронавирус инфекцияһы осрағы теркәлгән. Тәүлегенә 195 осраҡҡа артҡан. Тәүлек эсендә 5 кешенең ғүмере өҙөлгән. Үлем осраҡтарының дөйөм һаны 640 тәшкил иткән. Әлеге ваҡытта стационарҙа - 456 пациент, шул иҫәптән 39-ы - ауыр хәлдә. Алтыһы үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Ә 1641 сирле өйҙә дауалана.Тәүлегенә 131 дауаханаҡан тыш пневмония осрағы асыҡланған.

✓БР Башлығы Радий Хәбиров республика юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүсе Берҙәм дәүләт имтихандарын йөҙ балға тапшырған йәштәргә бер тапҡыр бирелә торған 150 мең һумлыҡ премия тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Бындай ҡарар йәштәрҙе республикала ҡалдырыу өсөн эшләнгән сараларҙың береһе булараҡ ҡабул ителә.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров "Әсәлек даны" миҙалына ҡушып түләнгән аҡсанан 13 процент һалым алынмауы тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Йәғни әсәйҙәр был түләүҙе тулы килеш - 17241 һум итеп аласаҡ. "Әсәлек даны" миҙалы республикала аҡсалата премия менән бергә биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән әсәйҙәргә бирелә. 2018 йылдан "Атаәсәлек ҡаҙанышы" ("Родительская доблесть") миҙалы ла ғәмәлдә. Уға 22 ғаилә лайыҡ булған. Наградаға бер тапҡыр бирелә торған 100 мең һум аҡса тапшырыла. Бына ошо түләүҙән дә хәҙер 13 процент һалым алынмаясаҡ.

✓ ***Фольклориада тураһында коллегаларыма ла "Бында күп милләттәрҙең дуҫ йәшәүен күреп, аптыраясаҡһығыҙ. Рәсәй тураһында күптәрҙең фекере дөрөҫ түгел, бында барыһы ла бер-берене менән татыу йәшәй", - тип һөйләйем...***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Башҡортостан донъя кимәлендәге был мәҙәни сарала донъя кимәлен күрһәтеүгә өлгәште, ти ҡунаҡтар һәм тамаша ҡылыусылар...

***Кристиан ИДАЛЬГО-МАЦЕИ, Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советы (CIOFF) президенты урынбаҫары:*** Мин Башҡортостанға өсөнсөгә киләм. Үҙем Канадала йәшәйем һәм республиканың беҙгә география йәһәтенән дә, күп милләтлелек, элек ерле халыҡтың күскенселәр булыуы, йылҡы малын аҫрауы менән дә оҡшашлығын күрәм. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, мин VI Бөтә донъя фольклориадаһын Рәсәйҙә үткәреү тураһында ҡарар ителеп, был маҡсатта тап Башҡортостан Республикаһы һайланғансы был төбәк һәм ерле халыҡ тураһында мәғлүмәтле түгел инем. Әҙерлек башланғас ҡына ошо хаҡта интернет киңлектәрендә уҡып өйрәндем һәм килгәс, бындағы ҡунаҡсыл, асыҡ күңелле кешеләр менән танышып, ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙем. Бөгөн үҙем социаль селтәрҙәрҙә мәғлүмәттәр бирәм һәм бар донъяға башҡорттар, Башҡортостан һәм Рәсәй тураһында белгәндәремде таратам. Быйылғы Фольклориада тураһында коллегаларыма ла "Бында шул тиклем күп милләттәрҙең дуҫ һәм тыныс йәшәүен күреп, аптыраясаҡһығыҙ. Рәсәй тураһында күптәрҙең фекере дөрөҫ түгел, ысынында, бында барыһы ла бер-береһе менән аңлашып, татыу йәшәй", - тип һөйләйем...

Беҙҙә лә йәштәрҙе фольклорға ылыҡтырыу эше еңелдән түгел, сөнки бөгөн кешеләрҙең иғтибарын үҙенә тартҡан төрлө шөғөлдәр бихисап. Шуға беҙҙең ойошма милли мәҙәниәткә ылыҡҡан йәштәрҙе һәр ваҡыт күтәрмәләргә, үҫешергә ярҙам итергә әҙер. Сөнки шунһыҙ мәҙәниәтте һаҡлап ҡалып булмаясаҡ, халыҡтың рухи байлығы юҡҡа сығасаҡ. Бөгөн был байрамда ҡатнашҡан кешеләр ошондағы тормош менән йәшәп, үҙ күҙҙәре менән күреп, танышып, аралашып, өйҙәренә ҡайтҡас, яҡын-тирәләге башҡаларға тәжрибәләрен уртаҡлашасаҡ һәм бындағы берҙәмлектең ниндәй яҡшы булыуын аңлатасаҡ. Юғиһә, ҡайһы берҙә иғтибарҙы ниндәйҙер башҡа юҫыҡтарға йүнәлтеп, беҙҙең төрлө булыуыбыҙға, тышҡы ҡиәфәттәргә, тәнебеҙҙең төҫөнә нығыраҡ баҫым яһайбыҙ. Әйләнергә лә, икенсе күҙлектән бағырға һәм уртаҡлыҡтарыбыҙҙы табырға кәрәк. Бөтә халыҡтарҙың да ниндәйҙер уртаҡ һыҙаттары бар. CIOFF тап шул уртаҡ булған әйберҙәрҙе популярлаштырыу менән шөғөлләнә, кешеләргә күрһәтергә теләй. Беҙҙең шундай теория бар: донъяла фольклор күп булған, ошондай фестивалдәр, байрамдар йышыраҡ үткәрелгән, кешеләр күберәк аралашҡан һайын, донъя яҡшыра барасаҡ. Дискриминация, расизм кеүек кире күренештәргә урын булмаясаҡ, сөнки былар кешеләрҙең билдәһеҙлектән ҡурҡыуына бәйле тыуған. Һәм бөгөн Башҡортостан халыҡтар дуҫлығы, мәҙәниәттәр төрлөлөгө, татыулыҡ тураһында бөтә донъяға һөйләй.

***Надежда БАБКИНА, Рәсәйҙең халыҡ артисы, Бөтә донъя фольклориадаһының илсеһе:*** Фольклориада башланырҙан алда Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров менән күрешеп, был сараны үткәрергәме-юҡмы тигәнерәк һорауҙар буйынса кәңәшләшкәйнек. Һәм, үткәрергә кәрәк, тигән фекергә килдек. Һаулыҡ кеше өсөн, һис шикһеҙ, төп ҡиммәт. Әммә кешенең рухы башҡа бик мөһим нәмәләрҙән дә тора һәм бөтә донъя халҡы ыҙа сиккән зәхмәтте еңеү өсөн шуларҙы алға һөрөргә кәрәк. Башҡортостан бөгөн "Берләшегеҙ!" тигән хәҡиҡәтте Ер шарындағы бөтә халыҡтарҙың хәтеренә төшөрә. Бер-берегеҙ тураһында тик яҡшы фекерҙә булығыҙ, ата-бабаларыбыҙ булдырғанды емермәгеҙ, тип мөрәжәғәт итә.

Башҡортостанға мин быға тиклем дә күп тапҡыр килгәнем бар: тәү сиратта кешеләр үҙенә тарта. Шул тиклем ҡунаҡсыл, саф күңелле халыҡ, уларҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре күркәм. Күп милләтле Әстерхан өлкәһендә тыуғанмын, шуға был күренеш минең өсөн яңылыҡ түгел һәм бында килһәм, ләззәтләнәм: бала саҡ осорома ҡайтҡандай тоям, мин тәрбиәләнгән мөхит иҫкә төшә. Был ер күңелемә яҡын, ғәҙәти. Ғөмүмән, ваҡыты-ваҡыты менән бөтәбеҙгә лә бала саҡ иленә сәйәхәт итеп әйләнеү ҡамасау итмәйҙер, тим. Унан аҙаҡ тормошта бойомға ашырыла торған яҡшы уйҙар һәм теләктәр тыуа. Шуға мин бында август аҙағында "Рәсәй йырҙары" фестивале менән тағы берҙе килергә ниәтләйем. Коллективыбыҙға быйыл 15 йыл тула, ошо айҡанлы Рәсәй төбәктәрендә концерттар ҡуясаҡбыҙ. Өфөлә генә түгел, Башҡортостандың ауылдары буйлап та йөрөргә теләк ҙур. Минең өсөн халыҡ йәшәгән ерҙә булыу ныҡ мөһим.

Әлеге мәлдә беҙ төрлө мәҙәниәттәрҙе үҙ эсенә алған үҙенсәлекле концерт программаһын төҙөйбөҙ. Унда Көнсығыш та, Азия ла, төрлө халыҡтарҙың моңдары сағылыш таба, ҡумыҙ кеүек милли инструменттар ҙа яңғырай. Бында шуны әйтергә теләгәйнем: кисә генә башҡорт йырҙарын башҡарып ҡарағаныбыҙ юҡ, тип хәбәр иткәйнек, бөгөн беҙҙең яҡшы танышыбыҙ "Арғымаҡ" төркөмөнән яңы тәҡдим ишеттек. Йәштәр: "Әйҙәгеҙ, бергә нимәлер эшләйек", - тип килделәр, уйлашҡандан һуң, уларға үҙебеҙҙең бер йырҙы бирҙек, хәҙер оранжировка эшләйәсәктәр. Ә улар "Һеҙ ҙә башҡортса берәй йыр йырлайһығыҙ инде", - тиҙәр. Улайһа, башҡортса дөрөҫ йырларға өйрәтәһегеҙ, тип ризалаштыҡ. Һәр милли мәҙәниәттең үҙенең серҙәре була һәм сит кешегә уны аңлау кимәленә етеү мөмкин түгел, быға бик күп тырышлыҡ һалыу кәрәк. Башҡорт йырҙарын йырлау өсөн дә бик ныҡ тырышырға кәрәк буласағын күҙ алдына килтерәм.

лыҡ аҡсаһының бер көн килеп "һә" тигәнсе юҡҡа сығыуы тәбиғи хәл. 1998 йылдың авгусында дәүләт һаҡлыҡ кассаларында аҡсалары "янған" тере шаһиттар был әсе һабаҡты яҡшы хәтерләй әле...

Яңыраҡ тағы бер шаңҡытҡыс хәбәр таралды: ҡартлыҡ буйынса страховкалы пенсия тәғәйенләү өсөн 2025 йылдан алып 15 урынына...30 йыл эш стажы талап ителәсәк! Был әлегә тәҡдим, ләкин аптырағандан ни ҡылырға белмәгән чиновниктар өсөн ул йәбешергә йәтеш кенә һалам булыуы ла ихтимал. Эш урының йәки һаулығың бармы, юҡмы - быныһы бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай: "һаҡалың биленә еткәнсе" эшләргә тейеш булаһың. Өҫтәүенә, төрлө сәбәптәр менән күптәр "күләгәлә", йәғни рәсми булмаған шарттарҙа эшләргә мәжбүр. Мәле еткәс, улар был йылдарҙы нисек итеп эш стажына индерер? Рәсми рәүештә эшләп, хеҙмәт кенәгәһендә был хаҡта яҙыу булған хәлдә лә, ҡайһы бер фирма һәм предприятиелар йыш ҡына бөлгөнлөккә төшә, ябыла. Аҙаҡ унда эшләп киткән кешеләр стаждарын нисек иҫбатлар? Ә кемдер һаулыҡ торошо буйынса 30 йыл буйы эшләй алмаһа? Былар бөтәһе лә кешене страховкалы пенсиянан мәхрүм итәсәк, ә социаль пенсия ҡатындарға - 65, ирҙәргә 70 йәштән генә бирелә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТУҠТА, МӘЛ!

# БЕҘҘӘ БАЙРАМ!













## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ауыл хужалығы предприятиеларының юғалтыуҙары 3,4 миллиард һумға баһаланған. Тупраҡтың һәм һауаның ҡоро булыуы, эҫе ел ауыл хужалығы культураларының үҫеүендә кире сағылыш тапҡан. Һөҙөмтәлә 335 хужалыҡтың сәсеүлектәре зыян күргән, республикала ғәҙәттән тыш хәл режимын индереү планлаштырыла. 311 мең гектар сәсеүлек хәүефле агрометеорологик күренештәр йоғонтоһона дусар булған, шуларҙың 150 мең гектары юҡҡа сыҡҡан. Шуға ҡарамаҫтан, республикала урып-йыйыу кампанияһы башланды - ошо көндәрҙә ҡайһы бер хужалыҡтар ужым бойҙайы, шипкән йыйыуға төштө.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин иҫерек килеш руль артына ултырыусыларға яза төрөн көсәйтеү тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Законға ярашлы, иҫерек көйө рулгә ултырыу икенсе тапҡыр ҡабатланғанда кеше 2-3 йылға иркенән мәхрүм ителә. Штраф санкциялары ла 200-300 меңдән 300-500 меңгәсә, йәки "ике-өс йыл осорҙағы хеҙмәт хаҡы йә башҡа килеме күләменә" тиклем күтәрелде.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостанда йод менән байытылған һөт ризыҡтары рецептарын әҙерләйҙәр. Кәрәкле документтарҙы алғандан һуң "Һөт кухняһы" предприятиеларында биойодлы продукция етештерелә башлай. Был хаҡта Башҡортостандың сауҙа министры Алексей Гусев республика хөкүмәтендәге оперативкала хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, элек, өҫтәмәне әҙерләй башлар алдынан, ата-әсәләрҙең фекере менән ҡыҙыҡһындылар: уларҙың күпселеге ыңғай ҡараны. Хәҙер йодлы һөт аҡһымы менән байытылған һөт продукцияһын лабораторияла һынау бара.

✓Рәсәйҙең Ҡораллы Көстәрендә ашығыс хеҙмәт осоро хеҙмәт стажы булып иҫәпләнә. "Армияла хеҙмәт иткән ваҡыт стажға иҫәпләнә, уның өсөн пенсия коэффициенттары бирелә: һәр йылға 1,8 пенсия коэффициенты", - тип хәбәр итте РИА Новости Рәсәй Пенсия фондының матбуғат хеҙмәтенә һылтанма менән. Пенсия коэффициенттары кешегә рәсми рәүештә эшкә урынлашҡан ваҡытта иҫәпләнә, уларҙың һаны страховка взностары суммаһына һәм стажға бәйле.

✓"Берҙәм Рәсәй" фирҡәһе Дәүләт Думаһына шәхси йорттарға газды бушлай һуҙыу тураһында төҙәтмәләр индерҙе һәм яңы закон 1 июндән ҡабул ителде. Фирҡә халыҡҡа кәрәкле документтар йыйыуҙа ярҙам итәсәк, газ индерергә кәрәкле йорттар исемлеген төҙөйәсәк. Социаль газ үткәреү бөтә ил буйынса ике миллионға яҡын йорт биләмәһенә ҡағыла.

✓ "Башҡортостан - тыуған яҡты өйрәнеү эше буйынса лидерҙарҙың береһе. Беҙҙә шәжәрәләр, генеалогик тикшеренеүҙәр төҙөү үҫешкән, бында тыуған яҡты өйрәнеүселәр ҙур роль уйнай, китапхана, музей эше әүҙем бара.



ТУҠТА, МӘЛ!

# БЕҘҘӘ БАЙРАМ!











ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙЫРСЫ ШИШМӘЛӘР ЯҒЫНДА...



**Башҡортостан Башлығы Бәләбәйҙә "Йырсы шишмәләр паркы"нда булды. Ҡала 2019 йылда бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи биләмәләрҙә уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары Бөтә Рәсәй конкурсында еңеү яулағайны.**

Бәләбәй йөҙҙән ашыу шифалы шишмә урғылған "йырсы шишмәләр" төйәге булараҡ билдәле. Республика етәксеһе төҙөкләндерелгән паркты ҡарап сыҡты һәм башҡарылған эштәргә юғары баһа бирҙе. Унын һүҙҙәренсә, парк - заманса һәм функциональ. Бында һәр быуын вәкиленә ял итеү өсөн бары ла бар.

Радий Хәбиров әйтеүенсә, быйыл Башҡортостандың 12 тораҡ пункты бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи биләмәләрҙә уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүгә иҫәп тота. Улар - Ағиҙел, Бәләбәй, Бөрө, Дүртөйлө, Күмертау, Межгорье, Мәләүез, Яңауыл, Туймазы, Стәрлетамаҡ, Верхотор һәм Кушнаренко ауылдары. Еңеүселәр уңайлы йәмәғәт киңлектәрен булдырыу проектын тормошҡа ашырыу өсөн 30-100 миллион һумлыҡ грант менән бүләкләнә. Бәләбәй конкурста икенсе тапҡыр ҡатнаша. "Төрмә һарайы кварталы" иҫке үҙәктә һәм яҡындағы биләмәне төҙөкләндереүҙә күҙ уңында тота. Проект авторҙары батша заманында Рәсәйҙә Себер трактында туҡтау урыны булған Старогородецкий кварталын үҙгәртеп ҡорорға йыйына.

# ФӘҠИРҘӘР КӘМЕЙМЕ?



**Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтың 1,6 проценты фәҡирлек сигендә көн күрә. "Рейтинг" мәғлүмәт агентлығы шундай һығымтаға килгән.**

Халыҡтың килеме буйынса төбәктәр рейтингына ярашлы, Башҡортостан 36-сы урында. Былтыр ошо уҡ рейтингта республика 30-сы урында ине. Төп күрһәткес - медиан (50-шәр процент халыҡтың юғары һәм түбән килем кимәле) килемдәрҙең билдәләнгән тауар һәм хеҙмәттәр йыйылмаһына нисбәте күрһәткесе - 1,48. 2020 йылда республиканың фәҡирлек сигендә йәшәүсе өлөшө 11,7 процент ине (МРОТ 2020 йылда 13 949 һум булды). Ул йылда ярлылыҡтың аҙаҡҡы кимәленә еткән халыҡтың өлөшө 1,6 процент булды. 2019 йылда иһә был күрһәткес 1,8 процент тәшкил итте. 2020 йыл һөҙөмтәләре буйынса Рәсәйҙә Ямал-Ненец автономиялы округында һәйбәт хәл күҙәтелә (килемдәрҙең тауар һәм хеҙмәттәр йыйылмаһы хаҡына нисбәте - 3,13). Һуңғы урында Тыва - 0,95.

2020 йыл баштары Рәсәй халҡының килемендә ныҡ сағылыш тапты. Былтыр рәсәйҙәрҙең аҡсалата реаль килем күләме 3,5 процентҡа кәмене. Шул уҡ ваҡытта дәүләт халыҡҡа финанс ярҙам сараһын киң йәйелдерҙе, айырыуса балалы ғаиләләр өсөн. Шулай итеп, дәүләт ярҙамы иҡтисадтағы кире күренештәрҙе өлөшләтә ҡаплау мөмкинлеген бирҙе.

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР ЙЫЙЫНЫ




**Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында Башҡортостандың тыуған яҡты өйрәнеүселәре форумы булып үтте. Тыуған яҡты өйрәнеүселәр форумының беренсе ултырышы 2020 йылдың декабрендә онлайн-форматта уҙһа, был юлы ул офлайн үткәрелде.**

Форумға республиканан тыш, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән ғалимдар, тарихсылар, башҡорт ҡоролтайҙары вәкилдәре, музей һәм китапхана хеҙмәткәрҙәре, журналистар йыйылды. Башҡортостан ауылдарының тарихын өйрәнеү мәсьәләләре, генеалогик тикшеренеүҙәр һәм тыуған яҡты өйрәнеүҙә яңы формат булараҡ башҡорт ырыуҙары хәрәкәте, республикала археология ҡомарткыларын өйрәнеү һәм популярлаштырыу проблемалары, тыуған яҡты өйрәнеү эшен популярлаштырыуҙа музейҙарҙың һәм китапханаларҙың роле ҡаралды. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың сәләмләүен уҡып ишеттерҙе. "Беҙҙең бурыс - йәштәрҙә тыуған яҡҡа, уның тарихына һөйөү тәрбиәләү. Мәғрифәтселәр Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов нигеҙ һалған тыуған яҡты өйрәнеү традицияларын беҙҙең көндәрҙә лә йәшәй. Шәжәрә байрамдары, башҡорт ырыуҙарының осрашыуҙары популярлыҡ яулай, тарихи реконструкцияларға ҡатнашыусылар һәм тамашасылар күберәк йәлеп ителә. Бөгөн тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү мөмкинлектәрен, музей майҙансыҡтарын һәм уларҙың формаларын әүҙемерәк файҙаланырға, иң яҡшы проекттарға грант тапшырырға, киң йәмәғәтселеккә еткереү өсөн тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләрен цифрлаштырыу менән шөғөлләнергә кәрәк", - тиелә сәләмләүҙә.

"Башҡортостан - тыуған яҡты өйрәнеү эше буйынса лидерҙарҙың береһе. Беҙҙә шәжәрәләр, генеалогик тикшеренеүҙәр төҙөү үҫешкән, беҙҙә бай археологик материал бар, бында тыуған яҡты өйрәнеүселәр ҙур роль уйнай, китапхана, музей эше әүҙем бара. Форумдың төп маҡсаты - тәү сиратта үҙ-ара эш итеүҙе ойоштороу. Бында профессиональ ғалимдар, реконструкторҙар, топонимика, спорттың милли төрҙәре, башҡорт ырыуҙары хәрәкәте менән шөғөлләнгәндәр йыйылған. Уларҙың бөтәһен дә дөйөмләштереп тыуған яҡты өйрәнеүселәр тип әйтергә мөмкин. Улар үҙ райондарына, төбәктәренә ҡайтҡас, яңыртылған форматта эшләй башлар", - тине "Башинформ"ға Башҡортостан Республикаһы Стратегик тикшеренеүҙәр институтының Социомәҙәни анализ үҙәге етәксеһе Юлдаш Йосопов. Тыуған яҡты өйрәнеүселәр форумын йыл һайын уҙғарыу күҙаллана.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Артур Аманбаев Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Артур Аманбаев 1991 йылдың 12 апрелендә Өфөлә тыуған. Өйләнгән, ул тәрбиләй. Ике юғары белемле - Башҡорт дәүләт аграр университеты (ер төҙөлөшө) һәм Башҡорт дәүләт университеты (юриспруденция). Хеҙмәт юлын Өфө районының Ер төҙөлөшө һәм архитектура агентлығында белгес булып башлай.

✓23 июлдән Токиола Йәйге Олимпия уйындары башланасаҡ. Унда рәсәйҙән 335 спортсы: 150 ир-ат һәм 185 ҡатын-ҡыҙ барасаҡ. Улар араһында Башҡортостандан рапира буйынса Олимпия уйындары чемпионы һәм бронза миҙал призеры Тимур Сафин менән фехтованиенан Аделина Заһиҙуллина ла бар.

✓21 июлдән "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан "Төркиә һауа юлдары" Истанбулға осоштарҙы яңырта. Был турала авиакомпанияның рәсми сайтында хәбәр ителә. Тура рейстар дүшәмбе, шаршамбы һәм йома көндәрендә башҡарыла. Осоу ваҡыты - 4 сәғәт 25 минут, эконом-класта билет хаҡы 23 мең һумдан башлана. Бынан алда "Башинформ" 22 июндән Рәсәй менән Төркиә араһында авиабәйләнештең тергеҙелеүе хаҡында хәбәр иткәйне.

✓7 июлгә халыҡтың вакцинациялаһырға тейешле өлөшөнөң 40,8 проценты, йәғни 240 186 кеше беренсе прививка эшләткән, 131 271-е ике этапты ла үткән. Ҡаланың эре предприятиеларында 39 085 кеше вакцинацияланған, ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәренең 76 проценты прививка эшләткән.

✓Кик-шеринг йәки электр самокаттарҙы прокатҡа алыусылар күбәйҙе. Йыш ҡына уларҙың аварияға сәбәпсе булыуы билдәле. Эсеп алған йәштәрҙең электр самокатында Октябрь проспектында, Ленин урамында автомобилгә ҡаршы йөрөгәнен күрергә мөмкин. Сит илдәрҙә уларға юлда йөрөү сикләнгән, айырым урындарҙа ғына йөрөй алалар. Беҙҙә лә ошо талапты индереүгә ихтыяж тыуҙы. Самокаттарҙы прокатҡа биреүселәр юлда йөрөргә ярамағанлығын ҡағиҙәгә индерергә тейеш. Шулай уҡ уларҙың тротуарҙа йәйәүлеләргә бәрелеү осраҡтары ла теркәлә. Шуның өсөн велосипедта, самокатта йөрөүселәр өсөн айырым юл булдырыу мөһим.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Ихтимал, Павловка ГЭС-ынан юғарыраҡ Ҡариҙел йылғаһында Түбәнге Һөйән гидроузелы төҙөлөшө мәсьәләһен ҡарарға тура килер. Был мәсьәлә 2005 йылда ҡаралғайны инде, ләкин ул ҡоролманы төҙөү бик ҡимmәткә төшәсәк...



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҠЫҘЫУ МӘЛДӘР...

**Йәй - ҡышҡа әҙерлек ваҡыты булһа ла, шул уҡ ваҡытта ул каникулдар, отпускылар һәм сәйәхәттәр мәле лә. Хәүефле осор тип ҡарап тормай, кемдер хатта сит илгә сығып та ял итергә тырыша, бәғзеләр иһә Башҡортостандың хозурлығы менән һоҡлана. Ә инде былдай мөмкинлектәре булмағандар баш ҡаланың иҫтәлекле урындары буйлап та экскурсияларға йөрөй ала.**

Былдай маршруттар ситтән килгән туристар өсөн дә булдырылған. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә Ҡулланыусылар баҙары, туризм һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау идаралығы начальнигы Азат Равилов БР-ҙың Туризм буйынса дәүләт комитеты, туроператорҙар һәм экскурсоводтар гильдияһы менән берлектә ойошторолған туристик маршруттар менән таныштырҙы һәм уларҙың даими камиллаштырылып тороуын билдәләне. Мәҫәлән, ял көнө турҙары, оҫталыҡ дәрестәре ойошторолған, милли ризыҡтарҙы тәмләп ҡарау, башҡорт милли кейемдәрендә фотосессиялар уҙғарыу мөмкинлеге булған интерактив экскурсиялар һәр кемде ҡыҙыҡһындыра. Республика буйынса экскурсион һәм туристик маршруттарҙың төп өлөшө Өфөнән башлана. Һәр көн Ҡунаҡһарай эргәһенән ике ҡатлы махсус автобус ҡуҙғала. Сәнәғәт туризмын үҫтереү маҡсатында Өфө ҡалаһы хакимиәте менән берлектә "Тәмле Өфө", "Башҡорт ере һәм башҡорт ризығы тураһында", "Өфөләге уикенд", "Рус мәҙәктәре", "Өфөлә ЧайКоффский" турҙары ойошторола. Улар хаҡында баш ҡаланың туристик порталында ентекләберәк танышырға мөмкин. Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылында йәй башынан уҡ оло йәштәге граждандар өсөн бушлай йәйәүле экскурсиялар уҙғарыла. Программаға Өфө буйлап сәйәхәт, музейҙар, иҫтәлекле урындар менән танышыу, табиптар менән консультациялар һәм сәйәсеү инә. Шулай уҡ 1 июлдән сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән граждандар өсөн йылғаларҙан ағыу турҙары ойоштоорола. Шулай уҡ ҡала халҡының инициативаһы менән муниципалитет һәм ҡала йәмәғәтселеге берлектә "Өфө муйынсағы" проекты эшләгән. Уны тормошҡа ашырғанда ҡаланың парк биләмәләре яңы форматта үҫешәсәк, әүҙем ял өсөн яңы зоналар барлыҡҡа киләсәк. Әйткәндәй, Фольклориада ҡунаҡтары өсөн 1-2 июлдә махсус экскурсиялар ойошторолған. Сит илдәрҙән килгән 499 ҡунаҡ ҡала, уның тарихы, мәҙәниәте, традициялары, иҫтәлекле урындары менән танышҡан.

Йәй шулай уҡ сығарылыш синыф уҡыусылары өсөн яуаплы мәл: улар Берҙәм дәүләт имтихандарын ғына түгел, юғары уҡыу йорттарына документтар ҙа тапшыра. Ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков белдереүенсә, быйыл баш ҡала уҡыусылары белемдәре менән ҡыуандыра - 36 уҡыусы имтихандарҙы 100 балға тапшырған.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

БОРСОУЛЫ ХӘЛ

# ЙЫЛҒАЛАР ҺАЙЫҒА...



**Быйылғы йәйҙең ғәҙәттән тыш эҫелеге арҡаһында Башҡортостанда төп һыу артерияларының кимәле төшә, ә йылғаларҙың һыуы быға тиклем булмағанса кәмей.**

Ҡоролоҡ һәм йылғаларҙың һайығыуы 2010-2012 йылғы хәлдәргә ҡабатлай. Ул йылдарҙа республика экологик һәләкәт алдында ҡалғайны. Федераль һыу ресурстары агентлығының Кама һыу бассейны идаралығы етәксеһе урынбаҫары Виталий Тюр һүҙҙәренсә, Башгидромет хеҙмәте күҙаллауҙарына ярашлы, төбәктә йәй аҙағына тиклем эҫе һәм ҡоро һауа торошо көтөлә, көҙҙән дә ямғырһыҙ килеүе ихтимал. "Июлдә уҡ беҙҙең 2010-2012 йылғы хәлгә тарыуыбыҙ бар, тик быйыл йылғаларҙың һайығыуы ул ваҡыттағына ҡарағанда күпкә шәберәк бара. 2010 йылдың йәй аҙағына Ҡариҙел менән Өфө һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары янындағы Ағиҙел йылғаһының кимәле күҙәтеү алып барылған бөтөн йылдар буйына иң түбән билдәгә еткәйне. Ул саҡ Ҡариҙелдең Шаҡша янындағы кимәле минус 76 см, Ағиҙел йылғаһынығы 130 см тәшкил итте. Бөгөнгө көнгә Ағиҙелдәге билдә - минус 160 см, ә Ҡариҙелдеке - минус 96 см", - ти В.Тюр.

Белгестәр фекеренсә, былдай хәл эҫәр тәғәйенләнештәге һыу һаҡлағыстарҙа һыу кимәленең байтаҡҡа кәмеүенә һәм шуның менән бәйле төбәк халҡы өсөн етди әҙемтәләргә килтереүе бар. "2010 йылғы ошондай уҡ хәлдә, Башҡортостанда һыуһыҙлыҡ мәсьәләһен ашығыс рәүештә хәл итеү өсөн махсус эш төркөмө булдырылғайны. Ул саҡ "Өфөводоканал", ТЭЦ, БРК,"Башнефть", БСК кеүек һыу менән файҙаланыусы эре компанияларға һыу проблемаһына тарымаҫ өсөн үҙҙәренең һыу алғыстарын камиллаштырырға тәҡдим ителгәйне. Был мәсьәлә өлөшләтә хәл ителде, тик эш тағы ла шунда: беҙҙең Павловка, Нөгөш һәм Йомағужа һыуһаҡлағыстарында йылғалар һайығыуы менән бәйле ниндәйҙер саралар күреү өсөн һыу запасы етешмәй. Килеп тыуған былдай хәлдә эре һыуһаҡлағыстарҙың эш режимын көйләү һәм һыу менән файҙаланыусылар ихтыяжын тәьмин итеү саралары күрергә кәрәк була. Мәҫәлән, Йомағужа һыуһаҡлағысы кимәлен тағы ла 3 метрға күтәреү мөмкинлеген алайыҡ, бының өсөн иһә гидроузелды камиллаштырыу талап ителә. Беҙ шулай уҡ һыу менән файҙаланыусыларҙы, Башҡортостан муниципалитеттар хакимиәттәрен йылғаларҙың һайығыуы менән бәйле хәлдәр хәүефен кәмитеү саралары күрергә һәм теләһә ниндәй хәлдәргә лә әҙер булырға саҡырабыҙ. Дөрөҫ, бында тәбиғи факторҙар ҙа бар, улар менән бер ни ҙә эшләп булмаған хәлдә лә киләсәкте ҡайтырта, үҙебеҙҙең ҡулдан килгән тиклем саралар күреү мөмкинлектәрен барлай алабыҙ. Ихтимал, Павловка ГЭС-ынан юғарыраҡ Ҡариҙел йылғаһында Түбәнге Һөйән гидроузелы төҙөлөшөнә яңынан әйләнеп ҡайтыу мәсьәләһен ҡарарға тура килер. Был мәсьәлә 2005 йылда ҡаралғайны инде, ләкин ул ҡоролманы төҙөү бик ҡимmәткә төшәсәк..."

Республикала йылға-күлдәрҙең һайығыуы тураһында белгестәр тәүге йыл ғына һүҙ алып бармай. Быйылғы эҫелек шарттарында һыу яткылыҡтарында быуға әйләнеү процесы бик көслө бара. Бынан тыш, боҙ китеү мәлендә лә йылғалар ныҡлап тулылана алманы. Өҫтәүенә, климат йылыныуы ла хәлде киҫкенләштерә.

ТУҠТА, МӘЛ!

# БЕҘҘӘ БАЙРАМ!















# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һипкел

❖ Һипкелдәрҙән арыныу өсөн халыҡ медицинаһында бер нисә ысул бар. Ләкин был осраҡта түбәндәге рецепт буйынса эшләнгән үләндәр төнәтмәһен оҙайлы ваҡыт эсергә кәрәк: 2-шәр ҡалаҡ шиңмәсгөл, календула, ала миләүшә, 3 ҡалаҡ һары мәтрүшкә, 1 ҡалаҡ күк сәскә (василек) сәскәләрен алып, йыйылманың ике ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда өс сирек стакан эсергә. Ошо дауаға ҡушып түбәндәге кәңәштәрҙең береһен генә ҡулланырға: петрушканың йәш япраҡтарынан һығылған һутҡа мамыҡ тампонды сылатып, көнөнә 2-3 тапҡыр һипкелдәргә һөртөргә; бәпембә япраҡтарын тартып, һутын һығырға һәм көнөнә 3-4 тапҡыр һөртөргә; водород перекисы менән һаҡ ҡына һипкелдәрҙе сылатып алырға, аҙағынан туҡлыҡлы крем һөртөргә. Һипкелдәрҙән арыныу өсөн сабырлыҡ кәрәк.

## Ҡайын еләге

❖ Күрем килгән осорҙа көслө һыҙландырһа, 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағына 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, 6-8 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм күрем бөткәнсе көн һайын яртышар стакан эсергә.

## Ҡояшта янғанда

❖ 10 мл зәйтүн майына 10 тамсы бөтнөктөң эфирлы майын ҡушып, янған урынға һөртөргә. Был янған тирегә һалҡын бөркә.

❖ Ҡыярҙы ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, һутын һығып алырға. Шул һутҡа салфетканы сылатып, янған урынға ябырға. Кипкән һайын салфетканы алмаштырып торорға.

❖ 4 ҡалаҡ ваҡланған кесерткәнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Һыуытылған кесерткән төнәтмәһендә салфетканы сылатып, ауыртҡан урынға ябырға. Хәл тиҙ яҡшыра.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең туҡымалары менән бергә (тула, кейеҙ, мех) ебәк туҡымалар күскенселәрҙең юғары ҡатлам кешеләре кейемен билдәләгән стилде барлыҡҡа килтергән һәм ябай төркиҙәргә үрнәк булып торған. Был турала яҙма сығанаҡтар ғына түгел, ҡурғандарҙағы ҡаҙыныу эштәре лә һөйләй. Шуларға нигеҙләнеп, Төрки ҡағанатының байҙары ла, ярлы халҡы ла "ебәк кейем, шулай уҡ ебәк менән тышланған тула халаттар һәм тундар кейергә" яратҡан, тип һығымта яһай Л.Р. Кызласов. Шыма, күп төҫлө һәм биҙәк төшөрөлгән ебәктәр (кейем, келәм, сепрәк ҡалдыҡтары) иртә һәм һуңғы осор малсыларынан ҡалған ҡомартҡылар араһында йыш табыла.

Төрки халыҡтар ҙа ебәк туҡымаларҙы ҡулланған, улар төньяҡ өлкәләргә күсенгәндә ебәк етештерелгән көньяҡ менән тура бәйләнештәрҙе юғалтҡан. Ебәк кейем ҡалдыҡтары Көньяҡ Уралдағы ҡайһы бер ҡурғандарҙа табылған (Ямаши-Тауских, Бекешевских; VIII-IX вв.); айырым үрнәктәрҙең анализы улар Сөғдтә эшләнеүен күрһәтте. Мораҡай ҡурғандарының бер ҡәберлегендә ебәк киҫәктәре табылған (XI б.).

Көньяҡ рус далалары күскенселәрендә тауар-аҡса мөнәсәбәттәре яҡшы үҫешкән булыуы тураһындағы фекерҙе үҫтереп, Г.А. Федоров-Давыдов "Слово о полку Игореве" эпосынан ҡыпсаҡтар (половцы) ҡиммәтле туҡымаларға бай булыуын дәлилләгән өҙөк килтерә. Тикшеренеүсе билдәләүенсә, тауар алмашыныу бигерәк тә Алтын Урҙа осоронда әүҙемләшә; ҡәберлектәрҙә табылған тәңкәләргә ҡарағанда, был процесҡа ябай күскенселәр ҙә ҡушылған. Был осорға ҡараған ҡәберлектәрҙең һәр бишенсе-алтынсыһында ебәк ҡалдыҡтары табылған.

Әйтелгәндәрҙән сығып, борон бай башҡорттар юҡҡа ғына кустарь, тәү сиратта көнсығыш туҡымаларына өҫтөнлөк бирмәгән, тиергә була. Урта Азия ебәктәрен һәм ярым ебәк туҡымаларҙы башҡорттар әҙрәс тип атаған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡама тиреһе менән ҡырпыуланған төлкө тундары әҙрәс менән тышланған. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн бишмәт, камзул, ирҙәрҙең халаттары әҙрәстән тегелгән. Тар ҡыҙыл йәки йәшел һыҙатлы ярым ебәк туҡымаларҙан еңел һәм йылы ирҙәр бишмәттәре теккәндәр. Кустарь туҡымаларҙан ҡорған, шаршауҙар тегелгән; был туҡымалар менән юрған, түшәк, урындыҡ ябыуҙарын тышлағандар.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДОНЪЯ ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ БЕРЛӘШЕҮ ҺӘМ...

## мәҙәни мираҫы менән уртаҡлашыу өлгөһө был!



(Башы 1-се биттә).

### Асылыу тантанаһы хайран итте

Бинаға килеп инеү менән бер сихри донъяға барып эләгәһең: һәр кем үҙенең сағыу милли кейемендә, милли көйҙәр яңғырай, һәр кемдең үҙ-ара туған телендә аралашҡаны ишетелә. Бөтәһе лә битлектәрҙә, әммә күтәренке кәйефтә булыуҙары, йылмайыуы күҙҙәрендә сағыла. Шау-гөр килгән ҡунаҡтар ағылған моңға сорналып, иркен фойеға үтә. Бында уларҙы Линар Дәүләтбаев етәкселегендәге Башҡортостан Милли уйын ҡоралдары оркестры ҡаршы ала. Башҡорт халыҡ көйҙәренең аһәңенә таң ҡалып торған тамашасылар оркестрҙың һәр сығышын дәррәү алҡыштарға күмә, дәртле бейеү көйҙәре яңғырау менән сағыу һары күлдәкле Панама ҡыҙҙары түңәрәк уртаһына төшөп китә: уларҙың башҡорт ҡыҙҙарына оҡшатып баҫырға тырышыуы шунда уҡ шәйләп алына. Ә Венгрияның "Кечкимет" халыҡ бейеүҙәре ансамбле артистары "Ҡарабай" башҡорт халыҡ йырын саф башҡортса башҡара. Саҡ ҡына ситтәрәк почта йәшниктәре урынлашҡан өҫтәл янында ла ҡунаҡтар күп: бында улар тыуған яҡтарына Башҡортостандан, Фольклориаданан иҫтәлеккә открыткалар юллай. Әйткәндәй, фестивалгә арнап сығарылған махсус эмблемалы хат конверттарына тәүге мисәтте республика Башлығы Радий Хәбиров, Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советы президенты Филипп Боссан, Рәсәй Федераль Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова ҡуйҙы.

VI Бөтә донъя фольклориадаһы, алдан хәбәр ителгәнсә, "Ер. Рух. Фольклор" тип аталған тамаша менән асылды. Ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла "Өфө-Арена" боҙ һарайының иркен майҙаны тамашасыларҙы быуаттар төпкөлөнә, башҡорт халҡының мифтарға солғанған тарих биттәренә, Рәсәйҙең асылын сағылдырған сәнғәт иленә алып китте. Ҡунаҡтарға алдан бер ниндәй мәғлүмәт бирелмәһә лә, барыһы ла "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосына таянып әҙерләнгән сағыу тамашаның асылына төшөндө, буғай. Һәр хәлдә, улар ғаләм батшаһы Самрау илен, уның илаһи ҡатындары Ай һәм Ҡояшты, кешелеккә ғүмер бүләк иткән ҡанбабабыҙ Урал батырҙың арыҫланға атланып дейеү-пәрейҙәргә ҡаршы яу сабып, Йәншишмә һыуын бар тереклеккә бөркөүен, ошо изге ерҙә ата-бабаларыбыҙҙың тормош көтөүен күҙ алдынан үткәрҙе. "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ. Яманға юл ҡуймағыҙ, Яҡшынан баш тартмағыҙ", - тигән Урал батырҙың аманатын планетаның иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин бар донъяға яңғыратты. Һәм тағы. Яуызлыҡҡа ҡаршы ҡылыс менән күтәрелгән халыҡтың тыныс тормошта кешелекле, ҡунаҡсыл, асыҡ күңелле булыуын "Һабантуй" күренешен ҡарап аңланы ҡунаҡтар. Тамаша барышында артабан оло Ватаныбыҙ - Рәсәй күренештәре, урыҫ халҡының киң күңеле, донъя мәҙәниәтендә ҡалдырған эҙен сағылдырған сығыштар дауам итте. VI Бөтә донъя фольклориадаһы гимны ла тәүге тапҡыр яңғыраны, уны РФ-ның атҡаҙанған йырсыһы, БР-ҙың халыҡ артисы Асҡар Абдразаков менән Рәсәй йырсыһы Марина Девятова башҡарҙы.

Дәртле башҡорт бейеүҙәре һәм моңо, рус балеты, халыҡ йырҙары яйлап заманса көйҙәр, хәрәкәттәр менән алмашынды һәм сәхнәгә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советы президенты Филипп Боссан күтәрелде. Республика етәксеһе Башҡортостанда йәшәгән милләттәрҙең күплеге, уларҙың дини инаныстары, йолалары, мәҙәниәттәре төрлө булыуға ҡарамаҫтан, үҙ-ара дуҫ, берҙәм булыуын телгә алды һәм фестивалгә килгән ҡунаҡтар бер-береһенән дәүләт сиктәре менән айырылған булғанда ла ошонда бергә туплана алыуына ҡыуанысын белдерҙе. "Беҙ барыбыҙ ҙа кешеләр һәм дуҫлашырға, яратырға, һәр кем үҙ халҡының мәҙәниәтен, иң яҡшы сифаттарын күрһәтергә теләй. Фольклориада беҙҙең халыҡтарҙың иң яҡшы йолалары, мәҙәниәттәре, моңдары менән алмаша торған урын булһын. Башҡортостанға рәхим итегеҙ!" - тип тамамланы һүҙен Радий Фәрит улы. CIOFF президенты Филипп Боссан иһә, тамаша менән һоҡланыуын белдерҙе һәм телмәренең аҙағында көтөлмәгәнсә башҡортса мөрәжәғәт итте: "Әйҙәгеҙ, бергә бейейек, музыка ҡоралдарында уйнайыҡ. Әйҙәгеҙ, дуҫтар, йырлайыҡ. Бергәләп был донъяны тағы ла яҡшыраҡ итәйек!" - тине ул һәм уның һүҙҙәре көслө алҡыштарға күмелде.

Тамашанан һуң ситтән килгән ҡунаҡтарҙың тәьҫораттарын һорашҡанда барыһы ла үҙҙәрен ғәжәйеп бер донъяға сәйәхәт иткәндәй тойоуын бәйән итте. "Беҙ ике көн алда Башҡортостан Милли музейына барғайныҡ, шуға башҡорт халҡының тарихы, ҡайһы бер легендалары тураһында бер аҙ хәбәрҙар инем. "Ер. Рух. Фольклор" майҙанын күреп, ныҡ тәьҫирләндем. Унда бейеүселәр "Ете ҡыҙ" легендаһын да һынландырыуын аңланым, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Мексика ҡунағы Луис Алонсо һәм уларҙа халыҡ ижадын һаҡлау йәһәтенән ниндәй саралар күрелә, тип ҡыҙыҡһыныуға ҡаршы "Был мәсьәлә беҙҙә киҫкен тормай", тип яуап бирҙе. Уның әйтеүенсә, Мексиканың һәр төбәгендә үҙ милли кейем үҙенсәлектәре бар һәм урындағы халыҡ шулай кейенеп йөрөүҙе ғәҙәт иткән, мәктәптәрҙә башланғыс синыфтан халыҡ ижады буйынса дәрестәр ойоштороу мәсьәләһендә дәүләт менән бергә эшләйҙәр икән. Ә бына Эстонияның Вана-Вигала ауылы мәҙәниәт йорто директоры Астра Пыльма: "Һеҙҙең батырҙар шундай мөһабәт! Урал батыр беҙҙең Калевипоэг кеүек", - ти. Бына шулай, ҡырҡҡа яҡын ил вәкиле башҡорт халҡының үҙенсәлекле мәҙәни донъяһы менән таныша, Рәсәйҙең төрлө милләттәр өсөн ҡәҙерле Ватан һәм бөтәһенә лә асыҡ күңелле булыуын тоя алды.

(Дауамы 16-сы биттә).

ҮӘТ ӘЙ!

# АПТЫРАҒАНДАР...

**Фольклориада ирекмәндәре был сараға килгән сит ил кешеләренең тәүге тәьҫораттарын йыйған:**

- Рәсәйҙәр бөтә ризыҡтарға ла укроп һала! Беҙҙә, Австрияла, уны айырым ризыҡтарға ғына ҡушалар.
- Беҙҙе оҙатып йөрөүсе куратор сәйенә һөт һалып аптыратты! Был ике эсемлекте бергә ҡушыу тураһында уйлап та ҡарағаныбыҙ юҡ ине, - тигән Панаманан килеүселәр.
- Колумбия ҡунаҡтары: "Рәсәйҙәрҙең фамилияһы ла, атай исеме лә атаһынан алына. Беҙҙә ике исем һәм ике фамилия - береһе атайҙыҡы, икенсеһе әсәйҙеке".
- Испаниянан килгән коллектив: "Беҙ беренсе тапҡыр ҡарабойҙай ашап ҡараныҡ. Уның тәме бик үҙенсәлекле кеүек күренде", - тип һөйләгән.
- "Башҡортостанда шул тиклем изгелекле кешеләр йәшәй! Бында сәй шул тиклем тәмле! Бал тәмле! Туғандарыбыҙға мотлаҡ башҡорт сәйен алып ҡайтып китәсәкбеҙ. Шулай уҡ сәк-сәкте лә күстәнәскә алырға кәңәш иттеләр. Был илдә насарҙы кәңәш итмәйҙәр икәненә ысын күңелдән ышандыҡ", - тип һоҡланған һәм аптыраған Польша ҡунаҡтары.
- Тәбиғәтегеҙ иҫ киткес матур, халҡығыҙ иҫ киткес ҡунаҡсыл һәм алсаҡ. Аш-һыуҙарығыҙҙы ла бик ятарып, айырыуса ҡамырға төрөлгән итте, тәмләткестәрҙән укропты яратып ашаныҡ. Иҫтәлеккә һәм күстәнәскә ала торған сувенирҙар, тәмлекәстәрегеҙ бигерәк тә оҡшаны", - тип хайран ҡалған Венгрия фольклор ансамбле артистары Ката Меско менән Андраз Ласзло Себе.

**✓ *Табын ҡәүемենә Йыуалыкүлдең Ағиҙел менән тоташҡан еренән башлап, төньяҡта Аҡбирҙе тауҙарына, көньяҡта Ҡуғанаҡ йылғаһына тиклемге ерҙәр бирелә. Кесе-Табын олоçо ошолай хасил була (уны Күрпәс-Табын тип тә атайҙар).***



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ДЫУАН - ТАБЫНДАРҒА ТУҒАН

Тарихи сығанаҡтарҙа күрһәтелеүенсә, Майҡы бей, йәғни Байку әмир оҙон ғүмерле кеше була, ул Сыңғыҙ хандың үҙенә лә, уның улы Джучиға ла, һуңғыһының улы Батый ханға ла хеҙмәт итә. Күрәһең, табын ҡәүеме заманында монгол ғәскәрендә хәрби хеҙмәттә булып, байтаҡ йылдар буйына дауам иткән монгол походтарында ҡатнаша. Майҡы бейҙең ҡушаматы Уйшын була, тимәк, табындар ҙа Үҙәк Азияла яугирлығы менән дан тотҡан усунь - уйшин этник берләшмәһенә ҡараған төркөм, тип ныҡлы фараз итергә мөмкинлек бар. Джучи һәм Батый хан яуҙары тамамланғас, табындарҙың ҙур бер төркөмө Башҡорт илендә тороп ҡала, башҡалары хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһын төйәк итә. Тап шул осорҙа табындарҙың бер өлөшө дыуан тармағын хасил иткәндер, тип иçәпләргә ерлек бар.



"Ҡысса-и Чингиз-хан" хикәйәтендә йыһангирҙың башҡорт ырыуҙары башлыҡтарына власть символдарын тапшырыуы хаҡында бәйән ителә: "Шунан Сыңғыҙ хан әйтте: "Эй, Уйшин Майҡы бей, һинең ағасың ҡарағас булһын, ҡошоң - бөркөт, ораның - "Салауат", тамғаң - һырға".

Табындарҙың һәм дыуандарҙың ата-бабаларының тарихи Башҡортостан территорияһына килгән юлы хаҡында күренекле мәғрифәтсе, яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев ошолай яҙа: "Майҡы бей...Ҡырым ярҙарын һәм Кубанды ҡалдырып, Кубань һәм Волга һыуҙары аша сығып, Яйыҡ тамағына етте... Унан Яйыҡ буйлап үргә күтәрелде һәм Яйыҡ үрҙәренән Тубылға һәм Иртышҡа тиклемге ерҙәрҙе биләп, оло ханға әүерелде". Бында табын ата-бабаларының монголдарҙың Дәште-Ҡыпсаҡ далаһына, Киев Русенә һәм Европа илдәренә (Польшаға, Венгрияға, Чехияға, Болгарияға) яһаған хәрби походынан кире - көнсығышҡа - ҡайтыуҙары һүрәтләнә. Күренекле башҡорт шағиры, суфый шәйехе, этник сығышы буйынса ирәкте башҡорто Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң шиғри шәжәрәһендә ошолай әйтелгән: "Асыл бабам Тубыл, Иртыш кәнарында ирмеш..."

Ҡара-Табын һәм Ирәкте шәжәрәләрендә Майҡы бейҙең үҙ халҡы менән йәшәп алып киткән яңы төйәгенең урыны ла күрһәтелгән: "Сыңғыҙ хан заманында Майҡы бей, Урал тауҙарының Миәҙәк тигән ерендә йәшәп, Миәс йылғаһы үҙәнендә күсеп йөрөгән". Был ерҙәр Көньяҡ Уралда һәм Урал аръяғында, улар хәҙерге Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре территорияһына ҡарай. Тимәк, табындар менән бергә дыуан ырыуының ата-бабалары ла тарихи Башҡорт иленә XIII быуат аҙаҡтарында - XIV быуат баштарында ҡушылып киткән. Күрәһең, дыуан ырыуының формалашыуы ла табындарҙың Себерҙәге Шибанид хандарына ялланып, хәрби хеҙмәт башҡарған осороно тура киләлер.

Монголдарҙың Джучи олоçо ерҙәрен Сыңғыҙ хан нәçеленән булған хандарға бүлешкән саҡта Шибан хан ҡулы аçтына Себер яғы (Тура виләйәте) һәм Башҡорт иле эләгә. Тап шуға күрә башҡорттар Шибанидтарҙы үҙҙәренең тәбиғи хандары итеп ҡабул итә. Күрәһең, Урал аръяғында һәм Себер далаларында көн иткән әүәлге табындарҙың бер өлөшө, төп ырыуҙарынан айырылып сығып, "дыуан" атамаһы аçтында үҙ тарихын башлап ебәрә. Алдараҡ бәйән ителгәнсә, монгол хандары идаралыҡтарында, хан хеҙмәтендә үҙҙәренә тапшырылған махсус бурыстарҙы үтәүсе абруйлы чиновниктар дуван тип аталған. Дыуан башҡорттары шәжәрәләрендәге һәм риүәйәттәрендәге Юлбуға бей ҙә ошо дәрәжәлә булып, артабан уның тоҡомдары һәм ырыуҙаштары дыуан этнонимын үҙ ырыуын үҙаллы бер ҡәүем сифатында танытыу маҡсатында ҡуллана башлағандыр.

Тап ошо замандарҙа, атап әйткәндә, XIV - XV быуаттарҙа, Себер һәм Урал аръяғындағы оло Табын иле тарҡалыу кисерә, улар айырымланған төркөмдәргә бүленеп, төрлөһө төрлө тарафтарға күсеп китә башлай. Ошо хаҡта башҡорт мәғрифәтсеһе, тарихсы һәм яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев былай яҙа: "Майҡы бейҙән Солтан бей тыуҙы, унан - Әхсән бей, унан - Аллабирҙе бей, унан - Әсәҙи бей, унан - Күрпәс бей. Әсәҙи бей Шәкәрле бей менән бергә Себер йортоноң Сыңғыҙ хан нәçеленән булған Ибәк һәм Шәйбәк исемле хандарға буйһона ине. Был хандар бөтөн бейҙәрҙе юҡ итергә ниәт итә. Хандарға яҡын булған кешеләрҙең береһе ошо ике бейгә әйткән: "Үҙ баштарығыҙҙы ҡотҡарығыҙ, юғиһә һәләк булырһығыҙ!" Шунан һуң Әсәҙи бей һәм Шәкәрле бей, аттарға менеп, ҡасып китә. Хан кешеләре уларҙы ҡыуып етә алмай".

Хан баçымынан ҡасып киткән табын халҡы ҡатай башҡорттарынан ер һорап ҡараһа ла, улар рөхсәт итмәй. Шунан табындар, Инйәр йылғаһы буйынан Ағиҙел ярҙарына тиклем килеп етеп, мең ырыуы башҡорттарына һыйына. Мендәр табындарға үҙҙәре билгән ерҙәрҙә төйәкләнергә ризалыҡ бирә. Табын ҡәүеменә Йыуалыкүлдең Ағиҙел менән тоташҡан еренән башлап, төньяҡта Аҡбирҙе тауҙарына, көньяҡта Ҡуғанаҡ йылғаһына тиклемге ерҙәр бирелә. Кесе-Табын олоçо ошолай хасил була (уны Күрпәс-Табын тип тә атайҙар). Артабан ошо олоç составында Төкөн-Табын, Кәлсер-Табын, Ҡумрыҡ-Табын, Бишул-Табын, Йомран-Табын һәм Дыуан-Табын аймаҡтары барлыҡҡа килә.

Дыуандарҙың Урал аръяғында йәшәгән замандары билгеһе булып, айырым топонимдар һаҡланып ҡалған: Төмән яғында Пышма йылғаһының бер ҡушылдығы Дыуан йылғаһы булһа, Силәбе өлкәһендә Дыуанкүл исемле күл бар. Себер ханлығында XV - XVI быуаттарҙа бер өҙлөкһөҙ барған сәйәси сыуалыштар барышында дыуан ырыуы башҡорттары, тәүҙәрәк биләгән ерҙәрен ҡалдырып, Урал һырттары аша Әй йылғаһы үҙәненә килеп сыға. Был ерҙәрҙе төйәк иткән Әйле ырыуҙары берләшмәһе, дыуандарҙы ихлас ҡабул итеп, уларға ошо урында ерләшергә мөмкинлек бирә. Һөҙөмтәлә тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында Дыуан-Әй, йәиһә Дыуан-Әйле аймағы хасил була. Был ваҡиғалар халыҡ хәтерендә, шәжәрәләрҙә лә сағылыш таба, шуға күрә академик Р.Ғ. Кузеевтың дыуандарҙың көнбайыштан, Һамар һәм Ағиҙел буйҙарынан Әй үҙәненә күсеп килеүе хаҡындағы фаразын ысынбарлыҡҡа тап килә, тип әйтеп булмай. Киреһенсә, дыуандарҙың бер өлөшө, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында көнбайышҡа табан хәрәкәт итеп, Ағиҙел һәм Сәрмәсән йылғалары бассейнына барып етә һәм хәҙерге Саҡмағош, Кушнаренко һәм Благовар райондары ерҙәрендә үҙҙәренең яңы төйәген таба. Тарихи сығанаҡтарҙа ошо территорияла Дыуан (Юхнев, П.И. Рычков, В.А. Урусов), йәиһә Дуваней (Ф.Жилин, И. Кирилов, П.И. Панин) олоçтары булыуы теркәлгән. Дуваней атамаһының башҡортса Дыуан-Әй тигәндең калькаһы булыуына шик юҡ.

**Арыçлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 27-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Батыр үҙе үлһә лә, данлы исеме иленә ҡайта

Усть-Белокалитвенскиҙан ситтәрәк, Северский Донец йылғаһының текә уң яҡ ярында, бик яҡшы ныҡытылған плацдармды немецтар нисек кенә булһа ла үҙ ҡулдарында ҡалдырырға теләй. Бында улар 3-сө һанлы шахтаның таш биналарын ДОТ-ҡа әйләндерә, шахта янындағы 79,9 ҡалҡыулығынан барса тараф ус төбөндәге кеүек күренә, бер нисек тә яҡын килерлек мөмкинлек булмай.

112-се атлы дивизия командованиеһы ошо ҡалҡыулыҡты алырға ҡарар итә, сөнки ул тирә-яҡты утҡа тотоу йәһәтенән дошманға ҙур өçтөнлөк бирә. Ҡалҡыулыҡты 21 ғинуарға ҡаршы төнгө атака яһап алырға план ҡорола. Был бурысты үтәр өсөн 30 кешенән торған махсус төркөм булдырыла. Төркөмдә, башлыса, фронтҡа яңы ғына алынған кавалеристар - төрлө халыҡ вәкилдәре була. Төркөмдөң командиры итеп лейтенант Аннаклыч Атаев (ул милләте буйынса төркмән), уның урынбаçары вазифаһына кесе лейтенант Яков Титов тәғәйенләнә. Төркөмдә тағы ла бер старшина, 3 өлкән сержант, 4 сержант һәм 20 рядовой сабельник була. Ошо бәләкәй генә төркөмдә 15 үзбәк, 4 рус, 4 украин, 2 татар, берәр башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡараҡалпаҡ, төркмән була, тик бер яугирҙың ғына милләте билдәһеҙ ҡалған. Ысынлап та, ошо ике тәүлектән ашыуыраҡ барған иç китмәле, үлемесле бәрелештә күп милләтле һалдаттарҙан һәм ике офицерҙан хасил булған төркөм бер туғандарҙай алыша, хатта һуғыш ғәрәсәте заманында ла йыш ҡабатланмай торған батырлыҡ өлгөһөн барса илгә таныта. Улар үҙ йәндәрен ил өсөн биреп, рухи үлемһеҙлек яулай.

Атаевсылар 21 ғинуарға ҡаршы төндә, Северский Донец йылғаһы боҙо аша шыуышып сығып, дошман уларҙы һис көтмәгән текә ярҙан өçкә күтәрелеп, гранаталар ташлап, дот һәм дзоттарға бәреп инә, шунда немецтарҙы ҡаршыларға әҙерләнә. 21 ғинуар иртәһендә, ҡалҡыулыҡты үҙҙәренә кире ҡайтарырға ниәт итеп, немецтар атакаға ташлана. 30 яугирға ҡаршы бер рота немец һалдаты һәм ут сәсеп килеүсе бронемашиналар сыға. Әммә атаевсылар көслө ут һәм гранаталар ярҙамында дошман һөжүмен кире ҡаға.

Әммә дошман һөжүмен көсәйтә бара. Был юлы дошмандың ике рота эсэсовсыларҙан, бронемашиналарҙан торған ҙур төркөмө яңынан атакаға ташлана. Һуғыш көн буйына бара. Немецтарҙың һәр атакаһы уларҙың яу яланында ятып ҡалған тиçтәләрсә мәйеттәре менән тамамлана. Лейтенант Атаев, немецтар үҙҙәренә ныҡ яҡынлашҡан бер мәлдә, һалдаттарын контратакаға күтәрә. Уның яугир батырҙары бер көн эсендә 200 фашист һалдатын юҡ итә. Әммә төнгә ҡарай 30 яугирҙан 17 кеше генә тороп ҡала.

22 ғинуарҙа барыһы ла яңынан ҡабатлана. Немец автоматсылары, танкылар артына йәшеренеп, һөжүмгә бара. Ошо көндә атаевсылар дошмандың тағы ла 4 атакаһын кире ҡаға. Танкылар артынан батальонға тиклем немец пехотаһы ҡалҡыулыҡҡа артылып ҡарай. Әммә ҡулына автоматтарын тота алған, гранаталарын дошманға ташларға көсө еткән, бер-бер артлы һәләк була барған яугирҙар һаман ут яуҙыра, дошман кире сигенә. Ике тәүлек эсендә дошмандың 300-ҙән ашыу һалдат һәм офицеры, 3 танкыһы, 1 бронетранспортеры юҡ ителә.

23 ғинуарҙа дивизия яугирҙары, Северский Донец йылғаһы аша сығып, атаевсылар батырҙарса һәләк булған ҡалҡыулыҡҡа күтәрелә. Бында улар иç киткес фажиғә картинаһын ғына түгел, ә тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ өлгөһөн күҙҙәре менән күреп, һыҙланған йөрәктәре аша үткәрә. Окоптарҙа, блиндаж алдарында хәрәкәтһеҙ ҡулдарынан автоматтарын ысҡындырмаған, һәләк булған атаевсылар ята. Тик был аянысլы үлем-һәләкәт күренеше түгел, ә үлемде инҡар иткән батырҙарҙың үлемһеҙлек картинаһы булып, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы тарихында, ғөмүмән, Бөйөк Ватан һуғышы тарихында мәңгелек бер халыҡ хәтирәһе булып ҡала.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

**Бынан алдағы аҙна ла Башҡортостан һәм башҡорт йәмәғәтселеге өсөн сағыу ваҡиғаларға бай булды. Шуларҙың береһе - башҡорттарҙың этник тарихы һәм антропологияһы буйынса уҙғарылған фәнни сессия. Уның эшендә Рәсәй, Башҡортостан һәм Польша, Беларусь республикалары ғалимдары ҡатнашты. Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре, тарих фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының почетлы докторы Игорь Кызласовты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы Аҡһаҡалдар советы түңәрәк ҡорға саҡырып, үҙҙәрен генә түгел, халыҡты, бигерәк тә башҡорттарҙы борсоған һорауҙарға яуаптар алды. Төп ҡыҙыҡһыныу, әлбиттә, боронғо Өфөнөң йәшен билдәләү тураһындағы мәсьәләгә ҡайтып ҡалды.**

# Өфөнөң мәҙәни

## унның 1600 йыллыҡ

**Башҡорт йәмәғәтселеген бөгөн тәү сиратта Өфө-II тип атап йөрөтөлгән боронғо ҡаласыҡтың аныҡ датаһын билдәләүҙе кисектерә килеү борсой. Ә инде был һорау үҙ артынан башҡаларын да тыуҙыра. Ғөмүмән, Өфө ҡалаһының нигеҙләнеүенә 450 йыл ғынамы, әллә уның тарихы тәрәндәрәкме?**

- Был һорау элек тә күтәрелә килде, хәҙер ҙә күтәрелә һәм ҡаласыҡтың боронғолого, бер нисә быуат йәшәүе Өфө ҡалаһының тарихы менән бәйлеме, түгелме икәнлеге барыһын да ҡыҙыҡһындыра. Беләһегеҙме, бында бер ҡаршылыҡ бар: Өфө - ул ҡаланың хәҙерге атамаһы, ул документтарҙа һаҡланған, тәүҙә ҡәлғә булған, һуңынан ҡала барлыҡҡа килгән. Ә археологтар тапҡан ҡаласыҡ нисек аталған, уны шул осорҙа йәшәгәндәр нисек атап йөрөткән - беҙ быны белмәйбеҙ, сөнки ул йылъяҙмаларҙа юҡ. Йәғни ҡаласыҡ табылған, хәҙерге ҡаланың атамаһы шартлы рәүештә уға күсерелгән һәм Өфө-II тип атала башлаған. Әммә, уйлап ҡараһаҡ, хәҙерге ҡаланың тирә-яғында ете боронғо ҡаласыҡ бар бит! Өфө-II - ул техник атама, ул документтарҙа рәсми рәүештә шулай аталырға мөмкин, әммә музей булдырабыҙ тиһәк, уның археологтар өсөн генә бирелгән техник атамаһын алға сығарыу кәрәкмәҫ.

**Ғөмүмән, боронғо Өфө ҡасан барлыҡҡа килгән?**

- Ҡаласыҡтың беҙҙең эраның IV быуатында барлыҡҡа килеүе археологтар тарафынан раҫланған һәм уның бер үҙенсәлеген күҙ алдына килтерегеҙ: был бөйөк һәм бер ваҡытта ла ҡабатланмаҫ һәйкәл урынында IV быуаттан алып XIV-XV быуатҡа тиклем ҡала тибындағы биләмә булған. Ҡаласыҡ атамаһы ла ул археологик һүҙ, ҡаласыҡ ҡала түгел, шуға күрә Өфө-II ҡалаһын башҡа төрлө атама менән яҙыу (ҡаласыҡ, биләмә) - минең өсөн һәйкәлдең статусын түбәнәйтеү ул.

Эйе, хәҙерге Өфө ҡалаһына 450 йыл. Ул ошо атама менән теркәлгән. Ә уға тиклем 1150 йыл элек бында ҡала үҙәге икенсе булған, сөнки рустар буш урында ҡәлғә төҙөмәгән. Мин остроггар темаһы менән шөғөлләнәм һәм рустарҙың ҡалаларҙы элек яһаҡ түләгән урындарҙа төҙөүен беләм. Ул ғына ла түгел, Себерҙең беренсе административ бүленеше алда булған дәүләттең административ бүленешен ҡабатлай. Шуға ла Өфө ошо урында булған ҡала һәм административ үҙәктәрҙең законлы дауамы булып тора. Башҡорттарҙы күсмә һәм ҡырағай халыҡ тип һөйләүҙән туҡтаһындар өсөн беҙҙә шундай козырь - боронғо ҡала мәҙәниәте бар! Йылъяҙмаларҙа башҡорттар X быуаттан иҫкә алына һәм улар кәм тигәндә һуңғы мең йыллыҡта ошо мәҙәниәттең вариҫы булып тора. Эш нимәлә, аңлайһығыҙмы - X быуатҡа тиклем власть системаһы икенсе була, ә X быуаттан һуң ул милли башҡорт власть системаһына әйләнә.

**Нияз Абдулхаҡ улы Өфөнөң 4 метрлыҡ мәҙәни ҡатламы менән ғорурлана ине...**

- Эйе, Өфөнөң 4 метрлыҡ мәҙәни ҡатламы уҡ һәйкәлдең оҙаҡ ваҡыт һәм уның әүҙем тормош менән йәшәүен раҫлап тора. Ошо 4 метр 1-2 сантиметр тәшкил иткән йоҡа горизонталь ҡатламдар менән бүленгән. Ә был 1-2 сантиметр ҡатламдар нимә аңлата? Археологик күҙлектән ҡарағанда, беҙ улар аша билдәле бер быуаттың йыл миҙгелдәрен күрәбеҙ. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: беҙҙә ҡаҙыныу эштәре барышында миҙгелдәрҙе билдәләп булған һәйкәл башҡаса юҡ. Был йоҡа ҡатламдар балсыҡ-эзбиз ҡушылмаһын тәшкил итә һәм уларҙың йышлығы ер өҫтөндә балсыҡ йөрттар тороуын, уларҙың тыш яҡтан эзбиз менән аҡланған булыу ихтималлығын күрһәтә. Ямғырлы миҙгелдәрҙә был ҡатлам һәм һыланған балсыҡ йыуыла, шулай итеп йоҡа пласт барлыҡҡа килә. Һәм был процедура даими ҡабатлана: кешеләр йорттарҙы тыштан һылай һәм аҡлай, ямғыр уларҙы ҡабаттан йыуып төшөрә.

Төрлө ҡалынлыҡтағы балсыҡ ҡатламдарын күреп, Нияз Абдулхаҡ улы мине саҡырҙы, сөнки был йүнәлеш буйынса Себерҙә тәүҙә атайым, һуңынан мин шөғөлләндем. Тәүҙә минә лә бындағы материал кирбес булып күренде, әммә улай булмай сыҡты һәм шундай уҡ ҡаҙыныу эштәренең методикаһы үҙгәртелде, сөнки бындай ҡаланы көрәк тәрәнлегендә, ғөмүмән, көрәк менән ҡаҙырға ярамай, ә ҡатламдарҙы бысаҡ менән айырырға кәрәк. Шул ваҡытта ғына ваҡыт ҡылыҡһырламаһын таба алабыҙ.

Өфө-II ҡалаһын ҡаҙығанда был биләмәнең нисек үҙләштерелгәнен, ундағы тормош циклын күреү - уникаль күренеш. Рәсәйҙә генә түгел, хатта Көнсығыш Европала башҡаса бындай һәйкәл юҡ һәм уны күҙ ҡараһы кеүек һаҡламаһаҡ, башҡа булмаясаҡ та! Мәскәү ҡалаһына 800 йыл, әммә 800 йыл 1600 йыл түгел! Ҡаҙанға 1000 йыл тип билдәләнеләр, әммә уларҙың 4 метрлы археологик ҡатламы ҡайҙа? Юҡ! Бөйөк Новгород яҡшы тикшерелгән, унда 14 ҡатлам ағас менән түшәлгән урамдар бар, әммә уларҙа 1-2 сантиметр тәшкил иткән йоҡаҡ ҡатлам юҡ! Шуға күрә мин Башҡортостан өсөн был боронғо ҡаланы ата-олатайҙарҙан ҡалған бүләк, ҙур бәхет тип иҫәпләйем. Рәсәйҙәге башҡа бер генә ҡала ла бындай бай тарихлы, археологик-тарихи мәғрифәтселеккә эйә бүләк тураһында хыяллана ла алмай.

**Ә шулай ҙа, ҡаламы, әллә ҡәлғәме боронғо Өфө?**

- Рәсәй археологияһы легендаһы булған билдәле Отто Бадер мәктәбен тамамлаған Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов был тарихи һәйкәл тураһында уҙған быуаттың 50-се йылдары башында уҡ белгән, әммә ғүмеренең һуңғы йылдарында ғына уны һаҡлауға ҙур көс һала алды. Ни өсөн был эште алдан уҡ, хәбәрҙар булыу менән уҡ башламаған, сөнки һәйкәлгә бер кем дә теймәгән, уға юғалыу хәүефе янамаған. Был территорияла төҙөлөш башланып, уға бульдозерҙар инеү менән, үҙенең дәлилдәре менән ул ундағы эштәрҙе туҡтатыуға өлгәште. Тағы бер мәлгә иғтибар итер инем: Башҡорт дәүләт университеты бында ҡаҙыныу эштәрен декабрҙә башланы, сөнки төҙөлөш уларҙы ҡырға сығырға мәжбүр итте. Шундай шарттарҙа ла улар ҙур табышҡа юлыға - алтын эшкәртеү оҫтаханаһын таба! Хәҙер әйтегеҙ инде - айырым, һаҡсыл мөнәсәбәт талап иткән ҡиммәтле металдарҙы эшкәртеү ауылса ҡарашмы?

Бында шулай уҡ ҡара металлургия, бронза ҡойоу, һөйәк, көршәк эшләү һ.б. табыла. Ҡала диуары артындағы ҡала зыяраты? Унда ерләнеүселәр беҙҙең эраға тиклем IV-V быуаттағы Византия әйберҙәре менән ерләнгән. Табылған артефакттар хәҙер музейҙа һаҡлана. Был кешеләрҙең нисек вафат булғанын белә алмайбыҙ, әммә улар иртә Византия әйберҙәрен ҡулланған. Уларҙы бында кемдер килтергән икән, тимәк, ҡулланыусыһы ла булған. Әммә факт - ул бер нәмә, уға аңлатма табыу - икенсе, сөнки был турала беҙ бер ҡайҙан да уҡый алмайбыҙ. Шөкөр, археология йылъяҙмаларҙы төҙәтә, өҫтәмәләр индерә, хатта инҡар итергә мөмкин. Әгәр археологик материалдар йылъяҙмаға ҡаршы килә икән, ул ваҡытта нишләргә? Әлбиттә, йылъяҙманы үҙгәртергә. Археологияның мөһим үҙенсәлеге лә шунда: ул йылъяҙмаларҙа булмаған йәки хаталы булған тарихты табып бирә.

Эйе, был ҡала йылъяҙмаларҙа юҡ. Әммә ул билдәле булған, һәм ҡайҙа теркәлгәнен ҡасандыр кемдер өйрәнә башлар. Был мәсьәлә - ҙур проблема. Һәм һорауҙар быуаттарҙан-быуаттарға һуҙыла.




*Нияз Мәжитов һәм Игорь Кызласов. 2013 йыл.*

***✓ Башҡортостандың символы итеп тирмәне күрһәтәләр. Ә ағас йорттар ҡайҙа? Башҡорт халҡының этнографияһы буйынса теләһә ниндәй этнографик эштә мин тирмәгә ҡарағанда ағас йорттар тураһында күберәк мәғлүмәт табам.***

Ә йоҡа ҡатламдар менән эшләй башлағас, нимә таптыҡ? Урамдар араһындағы юлдарға ағас түшәлгән. Ни өсөн урамдар барлыҡҡа килә, сөнки йорттар ер өҫтөндә, берәү ҙә бысраҡтан йөрөгөһө килмәй, шулай итеп кварталдар, ҡала цивилизацияһы барлыҡҡа килә. Ҡәлгә түгел, ә тап ҡала! Бәлки, артабан ҡаҙыныу эштәре алып барһаҡ, һыу каналдарын да, йорттарҙың ҡоймаларын да, башҡаларҙы ла табырбыҙ, әммә әлегә туҡтап торорға һәм йыйылған материалды өйрәнергә кәрәк.

**▸ Ни өсөн ҡаҙыныу эштәрен туҡтатырға кәрәк?**

- Тотош ҡаҙыһаҡ, беҙ был һәйкәлде юҡҡа сығарабыҙ. Миңә элегерәк Шүлгәнташҡа палеолитты өйрәнеүсе ғалимдарҙың килеүе, беренсе ҡатты ҡарап, ҡайһы бер оло йәштәгеләре икенсе ҡатҡа күтәрелә алмауы тураһында һөйләгәйнеләр. Кем менә алмаған, улар ҡиммәтле һәйкәлдә тәжрибәле йәш археологтарҙы үҫтерергә мөмкин, шул уҡ ваҡытта төрлө ерҙәрҙән коллегаларҙы саҡырырға була - улар килеп, аптырап, ҡарап, өйрәнеп ҡайтасаҡ. Шулай уҡ халыҡ-ара кимәлдәге конференция ойоштороу ҙа кәрәк.

**▸ Илнур Лоҡманов, "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы директоры: Музей проектының тәүге варианты ҡаласыҡ территорияһының яртыһын тиерлек алып тора ине, хәҙер унан баш тарттыҡ. 2018 йылда РФ Президентының Рәсәйҙә археологик материалдарҙы махсус һаҡлау урындары төҙөү буйынса ҡарары сыҡты, 2019 йылда Башҡортостан Башлығының депозитарий төҙөү буйынса Указы булды. Былтыр РФ Президенты ҡарамағындағы Мәҙәниәт буйынса советында Рәсәйҙә биш депозитарий төҙөү тураһында белдерелде һәм**

Пушкин урамы инеү урыны була, ә иң мөһиме - төҙөлөштән алда уларҙы тикшерергә кәрәк.

Кремлдә ҡаҙыныу урынын нығытып, күргәҙмә итеп эшләп ҡуйҙылар. Бында ике юл бар: беренсеһе, урындағы белгестәрҙе ошо техникаға өйрәтергә, уларҙы ҡала тибындағы боронғо һәйкәлдәрҙе реставрациялау һәм нығытыу курстарына ебәрергә; икенсеһе - ошо ысулды эшләгән Археология институтына мөрәжәғәт итергә. Әҙер ысул бар икән, ҡабаттан велосипед уйлап табыу кәрәкмәй. Шулай уҡ геологтарҙың карьерҙарҙың ҡомло бортын нығытыу тәжрибәһе бар. Әгәр ҡаласыҡты һаҡламаһаҡ, һуңынан, ә Боронғо Өфө-II ҡала һәйкәле ҡайҙа, тип һораһалар, нимә тип яуап бирербеҙ? Һыҙмаларҙы күрһәтергә була, әммә уларҙы үҙегеҙ эшләгәнһегеҙ, уйҙырма, тиеүҙәре лә ихтимал.

ҡалаһының 1600 йыллығын түгел, тап ҡала мәҙәниәте барлыҡҡа килеүҙең.

Һәм тағы шундай тәҡдим индерер инем: музей комплексының йәки музей-ҡурсаулыҡ комплексының атамаһы буйынса фекер алышҡанда, мин уға башта яңғыҙы ғына ҡаһармандарса көрәшкән, һуңынан оҙаҡ йылдар административ һәм башҡа ҡаршылыҡтарҙы үткән Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов исеме бирелеүен һәм экспозицияның уның портреты, тормош юлы, эшмәкәрлеге тураһындағы витриналарҙан башланыуын теләр инем. Кешегә археологик материалды аңлауы ауыр, ә уларҙы музейға ылыҡтырыу кәрәк. Нияз Абдулхаҡ улының йылмайып торған һүрәте уларҙы үҙе үк саҡырып торасаҡ.

**Шулай итеп, тарих фәндәре докторы Игорь Кызласов ҡатнашлығындағы һөйләшеүҙән**

ҡәбилә, хатта хәҙерге ваҡытта аталғанса, ғаилә тамғаһы ғына булмауын күрһәтә. Төп тамғаға һәр быуын нимәлер өҫтәй бара һәм был Себер, Көньяҡ Алтай материалдарында сағылыш таба. Бындай күренеште Монголиянан алып, Беларусь, Польшаға тиклем күрергә мөмкин.

Саян-Алтай тауҙары төрки телле халыҡтар иртә барлыҡҡа килгән берҙән-бер урын, быны тарихсылар ҙа, археология материалдары ла раҫлай. Беҙҙең эраға тиклем II быуат материалдарын ҡарағанда, яңынан-яңы мәҙәниәттәр өҫтәлһә лә, артабан урындағы мәҙәниәт быуаттар буйы үҙгәреш кисермәй һәм ошонан алып тамғаларҙың нисек үҙгәреүен күҙәтергә була. Ошондай мөмкинлекте файҙаланмау гонаһ булыр ине.

Таштых мәҙәниәтенә ҡараған һәм ҡаяла төшөрөлгән тамғаланған һүрәттә аттың ян-

# ҠАТЛАМЫ ҒЫНА ЛА...

## йәшен билдәләй

хатта икенсе ҡатҡа илткән баҫҡыс эргәһендә тороп илаған, сөнки билдәле мәмерйәне күрергә теләге шул тиклем көслө булған, әммә оло йәштә булғас, вертикаль баҫҡыстан күтәрелеү мөмкинлеге булмаған. Әгәр беҙ ҡаҙыныу эштәрен туҡтатмаһаҡ, Урта быуат ҡала археологияһы буйынса теләһә ниндәй белгес Өфө-II ҡалаһын күрмәһә, тәрән профессиональ яра аласаҡ.

**▸ Боронғо Өфөлә кемдәр йәшәгән?**

- Ул ваҡытта бында бахмутин мәҙәниәтенә ҡараған төп халыҡ, урындағы аборигендар һ.б. йәшәгән. Урында эшләнгән көршәктәр ҙә быны раҫлай. Был - бер. Икенсенән, беҙ улар ер өҫтөндә төҙөлгән йорттарҙа йәшәгәнлеген белә инекме? Ғәҙәттә, Башҡортостандың символы итеп тирмәне күрһәтәләр. Ә ағас йорттар ҡайҙа? Башҡорт халҡының этнографияһы буйынса теләһә ниндәй этнографик эштә мин тирмәгә ҡарағанда ағас йорттар тураһында күберәк мәғлүмәт табам. Әлбиттә, мал көткәндә тирмәләр ҡулланылған. Ә ҡышын? Өфө-II эргәһендә Имәнҡаланы иҫкә алабыҙ. Ә Өфө-II-нең стеналары нимәнән? Ул - балсыҡтан. Уны төҙөүселәр ағас ҡырҡа белмәгәнме, әллә төҙөлөш өсөн тирә-яҡта имәндәр бөткәнме? Юҡ, был ҡала-ҡәлғәне ҡайҙалыр уҡып ҡайтҡан архитектор-фортификатор төҙөгән. Стенаһы балсыҡтан, башняһыҙ, зигзаг рәүешендә, йәғни бында кешеләр нығытма төҙөгән, ә өсмөйөш эсенән ике яҡ асыҡ күренә. Ағас нығытманан айырмалы - бөтөнләй икенсе төҙөлөш. Был

**төбәктәрҙән тәҡдимдәр йыйылды. Беҙ республика исеменән үҙебеҙҙең тәҡдимдәрҙе ебәрҙек. Быйыл ҡаласыҡ территорияһының ҡаҙылған һәм төҙөлөш һөҙөмтәһендә емерелгән урынында тарихи-мәҙәни экспертиза үткәрҙек һәм унда археологик мираҫ объекттарының булмауын асыҡланыҡ. Тап ошо урында депозитарий буласаҡ, уның ҡыйығында прогулка зонаһы урынлашасаҡ.**

**Төҙөлөш өсөн территория Өфө-II ҡаласығы объектын һаҡлау һәм өйрәнеү өсөн булдырылған "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығына тапшырылған. Депозитарий артефакттарҙы һаҡлау урыны буларак түгел, ә экспозициялары булған музей комплексы итеп төҙөләсәк. Шулай уҡ мәҙәни ҡатламды күрһәтеү өсөн быяла стена формаһында археологик тәҙрә булдырыу күҙаллана. Музей комплексының майҙаны, Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы билдәләүенә ярашлы, 3 мең квадрат метр, 2 йәки 3 ҡаттан торасаҡ.**

- Ҡаршы яҡты ла үҙ территорияғыҙға индереүҙе һәм йорттарҙы алғанда, соҡорҙарҙы күмгәндә уларҙы тикшереүҙе проектҡа керетеүегеҙҙе һорайым. Беҙгә һуң ҡатламдар етмәй. Геосъемка үткәреп, иң бейек нөктәләрҙе билдәләргә һәм уларҙы ентекле өйрәнергә кәрәк, сөнки уларҙа 14-15-се быуат һаҡланыуы ихтимал. Сөнки тәңкәләр бар, ә мәҙәни ҡатлам юҡ. Иң мөһиме, территорияның икенсе яртыһын, соҡорҙо һәм диуарҙарҙың ҡалдығын да үҙегеҙгә алырға кәрәк - территория ла ҙурая,

Боронғо ҡала соҡорона килгәндә, ул хәҙер сүп-сар соҡорона әйләнгән, әммә унда тәбиғи мәҙәни ҡатлам ағып төшкән. Беҙ уны ла өйрәнергә тейеш. Йәғни ул да баһалап бөткөһөҙ сығанаҡ. Тупраҡты өйрәнеүселәр, геофизиктар, биологтар үҙҙәренең йүнәлеше буйынса тикшеренеүҙәр үткәреп, йылдар буйынса булмаһа ла, тиҫтә йылдар буйынса шул осорҙағы климатты билдәләй ала. Бында тотош университет үҙәгенең иғтибарын тупларға мөмкин

**▸ Табылған артефакттар буйынса аныҡ датаны билдәләп булмаймы?**

- Яҡшы шарттарҙа быуатын билдәләргә мөмкин. Әммә аныҡ датаны түгел. Археологик материалдар бит процессы күрһәтә: ҡасан башлана, ҡасан тамамлана. Ә уны баҫҡыстар буйлап һалып сығыу ауыр, уның ҡарауы, фәнни датировканы ҡуллана алабыҙ. Мәҫәлән, һөйәк таптыҡ икән, радиоуглерод анализына тапшырҙыҡ һәм датаны асыҡлайбыҙ. Әммә бының менән генә эш бөтәме? Алтын онтағы буйынса дата, дендрохронология буйынса дата... Шуныһы бәхәсһеҙ - Башҡортостанда боронғо ҡала мәҙәниәтенең (урбанизация) барлыҡҡа килеүенә 1600 йыл.

**▸ Рәсәй Президентының Өфө ҡалаһының 450 йыллығын байрам итеү тураһында Указы бар һәм беҙ уны үҙгәртә алмайбыҙ, бәлки, ҡала мәҙәниәте барлыҡҡа килеүҙең 1600 йыллығын ошо ваҡиғаға бәйләргә кәрәктер?**

- Минән һораһалар, мин 450 йыллыҡ сиктәрендә айырым секция итеп йәки айырым конференция итеп, ҡала мәҙәниәте барлыҡҡа килеүҙең 1600 йыллығын үткәрер инем. Өфө

**сығып һәм уның фекерҙәрен иҫәпкә алып, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы Аҡһаҡалдар ҡоро Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығын ойоштороу һәм үткәреү буйынса саралар планына түбәндәге тәҡдимдәрен еткерҙе:**

- "Боронғо Өфө" музей комплексын төҙөүҙе тиҙләтергә;
- юбилей саралары сиктәрендә "Боронғо Өфө" ҡала мәҙәниәте билдәмәһенең барлыҡҡа килеү тарихы буйынса фәнни секция ойоштороу һәм үткәрергә;
- Мәжитов уҡыуҙарын һәм "Боронғо Өфө" ҡала мәҙәниәте билдәмәһенең барлыҡҡа килеү тарихы буйынса халыҡ-ара конференция үткәрергә.

Шулай уҡ башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"ға арналған архитектура ансамбле булдырыу, милли музыка ҡоралы ҡурайға, Башҡорт автономиялы республикаһына нигеҙ һалыусыларға һәм суверенитетҡа нигеҙ һалыусыларға стела ҡуйыу тәҡдиме лә бер тауыштан хупланды.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**▸ Профессор Игорь Кызласовтың башҡорттарҙың этник тарихы һәм антропологияһы буйынса уҙғарылған фәнни сессиялағы "Башҡорт геральдикаһы тамырҙары: иртә Урта быуат дәүләттәренең аҡһөйәктәр тамғаһы" тип аталған сығышы ла бик ҡыҙыҡлы булды. Уны ла уҡыусы иғтибарына тәҡдим итәйек:**

- 1904 йылда сығышы менән Ырымбурҙан булған ғалим Дмитрий Соколовтың кешеләрҙең үҙҙәренең ниндәй йәмғиәткә ҡарағанын тамғалар менән күрһәткән китабы донъя күрә. Ул символдарҙың быуындар буйынса үҙгәреүен күҙәтә һәм уларҙың ырыу йәки

башында ла, ҡулында ла тамға бар. Һәм улар бер-береһенән айырыла. Быуаттар буйы төрлө тамғаларҙың үҙгәреүен күҙәтеү шундай һығымта яһарға мөмкинлек бирә: береһе - янбаштағыһы, шәхси хужаны аңлатһа, ҡулындағы тамға хужаның хужаһы икәнен күрһәтә. Шулай уҡ бөркөт тамғаһы быуындан-быуынға күсеп, уның ҡойроғо ғына үҙгәрә бара. Шундай уҡ тамғалар Алтын Урҙа осорондағы алтын һауыттарҙа ла табыла һәм улар аҡһөйәктәр затына ҡарауҙы белдерә. Тағы ла ҡәбер ташы ҡуйып, унда мәрхүмдең ниндәй ырыуға ҡарағанын белдергән тамға төшөрөлөүе лә йыш осрай.

Соколовтың хеҙмәте сыҡҡанға тиклем минең атайым, Леонид Романович, бындай тамғаларҙы ҡәбер таштарынан йыя һәм уларҙың нисек итеп үҙгәргәненә иғтибар итә. Рюриктар нәҫеленең геральдикаһына иғтибар итһәк, уларҙа өс сатлы һәнәк (трезубец) булыуын күрербеҙ, бөгөн ул Украина гербы. Йәғни Рюриктар үҙенә геральдиканы алда килгән төрки дәүләтенән алған. Польша гербтарында ла тамға графикаһы сағылыш таба. Бындай аҡһөйәктәрҙән тамға традицияһы Себерҙә һәм Монголияла барлыҡ дәүләттәрҙә лә йәшәй һәм улар беҙҙең эра башында барлыҡҡа килә. Бынан ниндәй һығымта яһарға мөмкин: башҡорттарҙың беҙгә 1904 йылда Соколовтың китабы буйынса билдәле булған һәм өйрәнелгән тамғалары иртә төрки дәүләттәренең аҡһөйәктәре һәм хакимлыҡ итеүсе династиялары символикаһына барып тоташа.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әҙерләне.**

ҺАБАҠТАР



# МАЛАЙ САҠТА...

## һәр кем шулай шәпләнә

**Өс малай тау итәгендә һөйләшеп ултырабыҙ. Малай тигәс тә, малай ҙа түгел инде беҙ. Быйыл 10-сы синыфты тамамлайбыҙ. Апаруҡ егет булған саҡ. Тау итәгендәге бәләкәй генә аҡланда һынған-мынған ботаҡтан эскәмйә һымаҡ нәмә әтмәләп алғанбыҙ һәм унда иркенләп ултырып, арҡаларҙы агас олонона терәп, һөйләшеп ултырырға яратабыҙ беҙ. Тирә-яҡта урман, унда бер-береһен уҙҙырып ҡоштар һайрай. Торғаны бер ожмах инде! Ә ауыл аҫта, әйтерһең, беҙҙең ус төбөндә генә. Ауылдағы тормош беҙҙең күҙ алдында ҡайнай. Кемдәндер ашығып ҡайҙалыр китеп барғаны, кемдеңдер өтәләнеп ҡайҙандыр ҡайтып килгәне, берәүҙең кем менәндер серләшеп торғаны һәм башҡаһы - ҡыҫҡаһы, бөтәһе беҙгә күренеп тора. Ә бына беҙҙең дә уларға күренеп торғаныбыҙ тураһында башҡа ла инеп сыҡмай. Һөйләй торған һүҙ тап ошоға бәйле лә инде.**

Бына бер мәл Илһам дуҫ эре генә кеҫәһенән тәмәке ҡабы килтереп сығарҙы. Беҙ, аптырап, уға төбәлдек. Нимә эшләргә йыйына икән ул тәмәке менән, тартмайҙыр ҙа инде, тип, албырғап ҡалдыҡ. Илһам, эшлекле кешеләй, тәмәке ҡабын алай әйләндерҙе, былай тулғандырҙы. Икеләнгәне, ныҡлы ҡарарға килә алмағыны күренеп тора. Шуғалыр, күрәһең, ул ҡабаланмай ғына тәмәке ҡабындағы яҙыуҙы уҡып сыҡты. Шунан уны йәлап асты. Тәмәкеләргә ҡарап, бер аҙға тынып ҡалды. Шул мәл ул ниндәйҙер ҡарар ҡабул итте, буғай. Иркен тын алып, эре генә тәмәке ҡабына ҡул һырты менән һуғып ебәрҙе. Әйтерһең, дә тәмәкеләр ошо мәлде көтөп кенә торған. Уларҙың бер нисәһе ҡаптан уктай атылып сыҡтылар ҙа... Юҡ, осоп китмәнеләр, ә ҡаптан баштарын сығара биреп, ҡатып ҡалдылар. Илһам уның берәүһен ашыҡмай ғына ҡулына алды. Баштарын ослайтып ҡатып ҡалғандарына бер килке ҡарап торҙо. Шунан беҙгә һынамсыл ҡараштарын төбәне. Ауыр һулап, теге тәмәкеләрҙең баштарын кирегә табан этте. Беҙгә ҡарап моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы.

- Үпкәләмәгеҙ, егеттәр, һеҙгә тәҡдим итеп тормайым. Һеҙ әле... (һүҙен таба алмай, бер килке өнһеҙ торҙо һәм әйтеп ҡуйҙы) бешмәгән помидор һымаҡ ҡынаһығыҙ.

Үәт, әй, тапты бит сағыштырыр нәмә. Әммә беҙ артыҡ үпкәләмәнек. Ул бит элек-электән үҙен өҫтөнөрәк ҡуйырға тырышты. Бер мәл урманда бер атты күмәкләп ҡамап тотоп алғайныҡ. Шул мәлдә Илһам, беренсе мин сабып киләм, тип еңмешләнеп атҡа тәүге булып менгәйне. Әммә оҙаҡ та сабып бара алманы, дөрһөлдәп ҡолап ятып ҡалды. Бер мәл ҡышҡыһын, был тауҙан мин беренсе шыуып төшәм, тип тауҙан аҫҡа табан атылғайны. Саңғыһы менән әллә ташҡа, әллә ботаҡҡа эләгеп, көртҡә гөрҫ итеп сумғайны. Саҡ ҡотҡарып ҡалдыҡ. Яҙғыһын һыуҙы иртә инеп, ауырып яткайны. Һөйләй китһәң, күп инде ундай хәлдәр. Бына әле лә бит иң беренсе булып тәмәке тотоп тора! Шул арала "бешеп-өлгөрөп еткән помидор" ҡулына алған тәмәкеһен тоҡандырып та ебәрҙе. Килештерә инде, беҙгә ҡарап уның аҡыл-күкһел төтөнөн өрөп тә ебәрҙе. Беҙ ҡулдарҙы алай-былай һелтәй-һелтәй уны ҡыуған булдыҡ. Һәм аптырап уға ҡарап ҡатып ҡалдыҡ. Аптырарлыҡ шул, атаһы яман бит уның. Белеп ҡалһа, эш харап! Үәт әй, ҡурҡмаған кеше бар икән был донъяла. Беҙҙең аптырау йөҙөбөҙгә сыҡҡандыр инде. Беҙҙең былдай хәлдән ҡыуаныс алған Илһам эре генә теш араһынан төкөрөп ҡуйҙы.

- Егеттәр, беҙгә ҡасандыр үҙаллы тормош көтә башлар кәрәк. Килер бер мәл, шул мәл беҙ үҙ һүҙебеҙҙе әйтергә тейешбеҙ. Гел генә атай ауыҙына ҡарап ултырып булмай ҙа инде. Улар бөгөн бар, иртәгә юҡ. Беҙгә бөгөндән башлап тормошҡа өйрәнер кәрәк. Беҙ бит ҡасандыр тормош дилбегәһен үҙ ҡулыбыҙға алырға тейешбеҙ...

Үәт, әй, былдай аҡылды кем биргәндер инде уға. Ниндәй матур итеп һөйләй. Һыбайлы атынан төшөп, йәйәүле ергә ятып, ятҡан кеше түшәгенән тороп тыңламалы хәбәрҙәр бит! Әммә көтмәгәндә Илһам ҡырҡа үҙгәрә. Оло тормошҡа тәүге аҙымдарын һһай төшкән, аушанлай-таушанлай тәпәй атлап китеп барған дуҫыбыҙҙың ҡапылдан ғына йөҙө ағара төшә. Ул тәмәкеһен тиҙ генә ергә ташлап, уны тыпырсына-тыпырсына үксәһе менән иҙгеслəй башланы. Үҙе ҡалтыранған ҡулдары менән ауыл яғына ишаралай.

- Атай ҡул болғап саҡырып тора. Мин ҡайтып киләйем әле.

Илһамды әйтәм, баянан бирле ауыл яғынан күҙен ала алмай ине. Шикләнеүе бушҡа булмаған шул. Атаһы уның ҡырын эшен күреп ҡалған бит. Хәҙер Илһамға әләгә инде. Беҙ тау итәгендә дуҫыбыҙҙы йәлләп ултырып ҡалдыҡ. Илһам өтәләнеп ауыл яғына табан сапты. Шәп тә йүгерә икән. Күп тә үтмәне, өйҙәренә барып та етте. Ә бына ҡалған яғындағы хәл үтә тиҙ булды. Илһам ҡапҡаны әллә асып өлгөрҙө, әллә ябып өлгөрҙө, уныһын аңғарып өлгөрмәнек. Атаһы сыбыртҡы менән Илһамдың һырт буйын әллә һыҙырҙы, әллә һыҙырманы, уныһын да күреп өлгөрмәнек. Ҡыҫҡаһы, күҙ асып йомған арала булды был хәл. Бер ҡарағанда, Илһам дуҫыбыҙ ҡапҡаға инеп бара ине. Икенсе ҡарағанда, уҡ һымаҡ атылып сығып та бара. Өсөнсө ҡарағанда, ауыл урамы буйлап сабып бара. Дүртенсе ҡарағанда, тауға үрмәләй ине. Бишенсе ҡарағанда, эскәмйәлә ултыра ине. Ағарған йөҙөнә бер аҙ ҡыҙыллыҡ йүгергәс, бер ни булмағандай, Илһам дуҫыбыҙ һүҙен дауам итә.

- Әле атайым менән ирҙәрсә һөйләшеп алдыҡ (бына шулай йылғыр ул беҙҙең дуҫыбыҙ). Атайым шулай ти: "Һин, улым, ҙур үҫтең. Хәҙер һинең тормошоңа тығыла алмайым. Һиңә ҡасандыр үҙаллы тормош көтә башлар кәрәк. Мин хәҙер ҡартмын. Бөгөн бармын, иртәгә юҡмын". Ул миңә: "Тәмәке тартҡың килә икән, улым, тарт әйҙә", - тип тә әйтте. Атайҙы әйтәм, бигерәк еңел ҡотолдо. Имеш, тартҡың килһә, тарт. Минең һаулыҡ тураһында уйлап та бирмәй. Ә мин ныҡлы ҡарарға килдем - тәмәке тартмаҫҡа! Был минең ныҡлы ҡарарым, һуңғы һүҙем. Һеҙгә лә тартмаҫҡа кәңәш итәм. Исмаһам, һеҙ минең хатаны ҡабатламағыҙ...

Беҙ йәйләп ҡайтып киттек. Илһам дуҫыбыҙ, мин ултыра бирәм әле, тип, тороп ҡалды. Беҙ нишләптер уларҙың өйө эргәһенән йүгереп үтеп киттек.

...Малай саҡта, эйе, һәр беребеҙ шулай шәпләнә инде. Һәр кем үҙен шәхес итеп раҫларға ынтыла. Уны эргә-тирәһендәге башҡа малайҙар, иптәштәре хуплай йә иҫкәртә. Ә атайҙарҙың өгөтө һәм... сыбыртҡыһы иһә иң оло һабаҡ биреүсе тәрбиә алымы булараҡ һанлана. Шәхес булырға ынтылған малайҙар, егеттәр, ир-егеттәр һәм уларҙың арт һабағын укытып, тура юлға күндерер атайҙар һәр саҡ булһын был донъяла.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

АУЫЛЫМ МӘҘӘКТӘРЕ

# ӨЙ БӨТӨН, ШУҒА ТӨТӨН

### Дүрт йәштә...

Әхирәтемә ҡунаҡҡа килгәнбеҙ. Биш йәшлек улы бер хатаһыҙ, тасуири итеп китап уҡып ултыра. Һоҡланып ҡарап торҙом да:

- Оһо, ҡалай матур уҡый! - тинем. Әхирәтем:

- Ул өс йәшендә уҡый башланы! - тип яуаплағайны, улы китабынан айырылып:

- Мин һиңә иҫәрме ни өс йәштә китап уҡып ултырырға! Өс йәштә хәрефтәрҙе генә өйрәндем, дүрт йәшемдә саҡ уҡый башланым! - тип төҙәтмәһенме.

### Автотүләү

Һигеҙ йыл самаһы элек телефоныма ай һайын 50 һум аҡса күсә башланы. Кем күсергәнен дә белмәйем, тик "ошо номерға 50 һум аҡса күсте" тигән ҡыҫҡа хәбәр килә. Аптырағас, бөтә туғандарымдан, дуҫтарымдан, таныштарымдан шылтыратҡанда һорашам, беҙ түгел, тиҙәр барыһы ла. Ниндәйҙер изге йән хәйер һала икән тип, аҡса күскән һайын уға бағышлап доғалар уҡый башланым. "Эй, Хоҙайым, мине ҡыуандырғанда үҙе ҡыуанһын, миңә һалған аҡсаһы үҙенә йөҙ-мең тапҡыр артып ҡайтһын!" - тим. Бер ҡунаҡта ултырғанда, тағы ла был хәлгә асыҡлыҡ индерергә уйлап, һорай ҡуйҙым. Зирәк кенә ҡунаҡ үҙемдән барыһын да төпсөнөп һорашып алғас: "Һинең бит банк карточкаһына автотүләү ҡуйғандар!" - тип ҡысҡырып көлөп ебәрмәһенме. Һуңынан банкта быны дөрөҫләнем. Мин йыл буйы автотүләүгә доғалар бағышлап ултырғанмын шулай!

### Һинең үгеҙҙән түгел

Ауылда бер апай үгеҙен бестереп өлгөрмәгән. Күпмелер ваҡыт үткәс, апайыбыҙ ауылдағы һыйыры быҙаулаған һәр өйгә килеп, үгеҙҙең "эше" өсөн хаҡын таптырып йөрөй башланы. Беҙҙең һыйырға ла сират етте бер көн. Атайым был ханымға ҡаршы сыҡты ла, ашыҡмай ғына: "Үгеҙең ниндәй төҫтә ине? Ҙур инеме? Тауышы нисек ине?" - тип һораша башланы. "Үгеҙем көрән төҫтә, башында аҡ табы ла бар, ҙур ине, гел үкереп ҡайта торғайны", - тип ҡылыҡһырлай апай. Атайым ихлас тыңлап торҙо ла: "Беләһеңме, беҙҙең быҙау ҡара төҫтә, башында табы ла юҡ. Улайһа, һинең үгеҙҙән түгел инде, шуға аҡсаһын да бирә алмайым!" - тимәһенме! Апай ни әйтергә лә белмәй, бер аҙ аптырап торҙо ла, аҡсаһыҙ сығып китте.

### Бөтөн өй

Егерме йыл элек беҙҙең ғаиләә ауылда яңы өй һалып керҙе. Мейес сығарырға әле яңы ғына был эшкә тотонған оҫтаны саҡырҙылар. Бәлки, аҡсаһын әҙерәк һорар тип уйлағандыр атай-әсәйем. Бер нисә көн эсендә өйҙө йәмләп, мейес ҡалҡып та сыҡты, уны ҡыуанып яғып та ебәрҙек. Тик ни эшләптер төтөн өйгә тулды. Әсәйем: "Тапҡанһың оҫта!" - тип атайымды әрләй. Атайым да бирешмәй: "Өй бөтөн, шуның өсөн төтөн!" - ти ғорур ғына.

Ул көндө беҙ тәҙрә-ишектәрҙе асып, өйҙө төтөндән елләттек. Һуңынан тәжрибәлерәк оҫта килеп, яңынан мейес һалып бирҙе. Бала саҡта булған ошо ваҡиға мине, үҫә төшкәс, тормоштағы төрлө хәлдең дә ыңғай яғын күрергә өйрәтте. Ысынлап та, өйҙөң бөтөнлөгө төтөндөң булыуына ҡарағанда хәйерлерәк түгелме?

### Бригадирға өмәгә

Ауылдың бригадиры үҙенә бесән эшләтергә ир-егеттәрҙе өмәгә алып сыға. Һәр береһе тырышып эшләй икән. Тик бер йәш егет кенә илке-һалҡы йөрөп, бригадирҙың теңкәһенә тейә. Бына төшкө аш мәле етә. Бригадир ағайыбыҙ мул ғына һыйын, ит, картуф, майҡаймаҡ, ҡатыҡ, йомортҡа, икмәген теҙә башлай. Теге ялҡау егетебеҙ оло һыйға ҡарап тора ла: "Ағай, әллә беҙ һиңә өмәгә сыҡтыҡмы, колхозға түгелме?" - тип һорап ҡуя. Колхозға булмағас, төштән һуң ең һыҙғанып эшләй унған егетебеҙ.

### Бейә дағаһы

Ауылдағы тимерлеккә ир-егеттәр йыйылып, бер-береһенең хәл-әхүәлен һорашып, һуңғы яңылыҡтарҙы һөйләп, шаярып-көлөп ултыралар икән. Шунда бер ағайыбыҙ: "Егеттәр, әйтегеҙ әле, нисек малай эшләргә? Еңгәйегеҙ алты ҡыҙ алып ҡайтты бит!" - тип кәңәш һораған. "Тәжрибәле" ауылдаш: "Тағы бәпәй эшләйем тиһең, мендәр аҫтына даға һал. Атты ысын ир-егет кенә тотоп дағалай ала бит!" - тиген. Бер йылдан тағы ла ауылдың ир-егеттәре тимерлектә осрашҡан. Ҡыҙға бай ағайыбыҙ: "Эй, егеттәр, ни эшләп теге ваҡыт алданығыҙ инде? Мендәр аҫтына даға һалһам да, етенсеһе лә ҡыҙ булды!" - тиген. Кәңәш биргән ағайыбыҙ ҙа юғалып ҡалмаған: "Дағаһы бейәнеке булғандыр!" - тип әйтеп ҡотолған.

**Айһылыу СИРБАЕВА.**
**Дыуан районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ФАЙҘАҺЫҘ РИЗЫҠ...

■ Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге буйынса Европа агентлығы ғалимдары асыҡлауынса, телевизорҙан рекламаланған төрлө йогурттарҙың кеше организмы өсөн бөтөнләй файҙаһы юҡ икән. Белгестәр 500 етештереүсенең тауарын тикшергәндән һуң, уларҙың 70 процентының рекламала әйтелгән мәғлүмәткә тап килмәүен билдәләгән. Әммә был яңылыҡ йогурттарҙы бөтөнләй ҡулланырға ярамай, тигәнде аңлатмай. Бары уларҙан ниндәйҙер дауалау эффекты көтмәгеҙ. Британия ғалимдары фекеренсә, көн һайын һөт йәки һөт аҙыҡтары ашаусылар гипертония менән һирәгерәк ауырый. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һөт аҙыҡтарында кальций һәм калий күп, улар артериаль баҫымды көйләү һәләтенә эйә.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, үҙ йәшенән күпкә йәшерәк күренгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғәҙәттә ҡан баҫымы түбән була, был иһә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыу хәүефен түбәнәйтә. Шуға ла бындай ҡатын-ҡыҙҙар оҙағыраҡ йәшәй. Табиптар әйтеүенсә, улар беренсе тапҡыр тышҡы ҡиәфәт менән түбән ҡан баҫымы араһындағы бәйләнеште өйрәнә. Экспериментта рҙа 514 кеше ҡатнашҡан, уларҙың уртаса йәше 63 йәш була. Шулай уҡ нәҫелендә оҙаҡ йәшәүселәр ҙә йәшерәк күренә икән, был яңылыҡ ир-егеттәргә лә ҡағыла.

■ Шәкәр иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекциялы ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

■ Хәҙерге химия ҙур тиҙлектә үҫешә, бөгөн кеше тарафынан синтезланған әйберҙәр уратып алған беҙҙе. Бензол, этилбензол, формальдегид, фенол, ксилол, толуол иң ағыулаусы матдәләр иҫәпләнә һәм улар бөгөн һәр йортта ла бар. Фенол линолеум, буяуҙар составында, ДВП һәм ДСП-нан яһалған осһоҙло йорт йыһаздарында бар. Фенол бауырға ултыра һәм уның эшмәкәрлеген боҙоуы ихтимал. Формальдегид - канцероген, өҫкө тын юлдары ауырыуҙарына, баш ауырыуына, аллергияға килтереүе бар. Ул осһоҙло уйынсыҡтарҙа ла бар. Шуға ла балала астма башланһа, йорттағы әйберҙәргә ҡарап сығырға кәрәк. Винил обойҙары винилхлорид бүлеп сығара, шуға ла иң зарарһыҙы булып ябай ҡағыҙ обойҙар иҫәпләнә. Елем крахмалы ҡулланырға кәңәш ителә. Сағыу, матур тәрилкә, сынаяҡтар ҙа хәүеф төркөмөндә. Һауыт-һаба нық булһын өсөн уларҙың составына меламин тигән пластик ҡушыла. Алюмин кәстрүлдәрҙән дә баш тартыу яҡшыраҡ. Алюмин ярайһы әүҙем металл. Ул организмда туплана, Альцгеймер ауырыуына алып килеүе бар. Тефлон таба урынына керамика менән ҡапланғанын, сөгөнөн ҡулланырға кәрәк. Көнкүреш химияһы ла көслө аллерген. Составында лаурил сульфаты булған шампунь-гелдәр, шулай уҡ һауыт-һаба йыуыу өсөн тәғәйенләнгән саралар зыянлы. Гәрсис порошогы, аш содаһы ла һауыт-һабаны яҡшы таҙарта.

ФОЛЬКЛОРИАДА - 2021

**Фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәрен ойоштороу буйынса халыҡ-ара советтың (CIOFF) Бөтә донъя фольклориадаһы программаһы сиктәрендә сараның икенсе көнө "Торатау" конгресс-холының ултырыштар залында "Донъяның мәҙәни мираҫының бер өлөшө булараҡ, Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫы" тип аталған халыҡ-ара конференция менән башланды.**

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨ...



### Халыҡ мәҙәниәтен һаҡлаусылар кәңәшмәһе

Йыйылыусыларҙы Рәсәйҙең Мәҙәниәт министры Ольга Любимова видеояҙма аша тәбрикләп, был сараны үткәреү Рәсәй өсөн ҙур бәхет булыуын, Башҡортостан халҡының ҡунаҡсыллығы, ихласлығы һәм уңайлы инфраструктураһы арҡаһында уның юғары ойошҡанлыҡ менән үтеүенә ышаныс белдерҙе. Конференцияның модераторы, В. Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт Халыҡ ижады йорто директоры Тамара Пуртова билдәләп китеүенсә, конференцияла Рәсәйҙең 57 төбәгенән халыҡ ижады йорттары директорҙары, ошо системала эшләүселәр ҡатнаша һәм уларҙың барыһы ла халыҡ ижадын, фольклорҙы туплау, һаҡлау менән шөғөлләнә. Ғөмүмән, Тамара Валентиновна белдереүенсә, һәр рәсәйле ошо эшкә үҙ өлөшөн индерә. "Был залда йыйылыусыларҙың береһен дә был эштең ни тиклем мөһим һәм кәрәкле икәненә инандырыу кәрәк түгел, - тине ул. - Бында бары тик бер уйҙа, бер фекерҙә булыусылар ултыра. Һәр ҡайһыбыҙға традицияларҙы, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, үҙ мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау, уның киләсәген тәьмин итеү - бик мөһим. Шуға күрә, йөҙ тапҡыр һөйләгәнсе, бер тапҡыр күреү яҡшыраҡ булһын өсөн, бөгөнгө программала Рәсәйҙең төрлө мөйөштәрендә йәшәгән халыҡтарҙың традицион мәҙәниәтен күрһәтергә, уларҙың тәжрибәһе, белеме менән таныштырырға тырыштыҡ".

Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Республика Башлығы Радий Хәбиров исеменән тәбрикләү һүҙҙәрен еткерҙе һәм CIOFF-ҡа Башҡортостанға Фольклориаданы ойоштороу һәм әҙерләү буйынса күрһәтелгән ышанысы өсөн рәхмәт белдереп, республиканың гармониялы милләт-ара мөнәсәбәттәр ҡороу буйынса ҙур тәжрибәгә эйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Бында килгән коллективтар - улар халыҡ мәҙәниәтен һаҡлаусылар һәм уны быуындан-быуынға тапшырыусылар. Бөгөн беҙ үткәргән фәнни тикшеренеүҙәр, уларҙың һөҙөмтәләре буйынса сығарылған баҫма мәғлүмәт тарихи факттар, йөҙ, бәлки, мең йылдан һуң да ҡулланыласаҡ архив сығанаҡтары булып ҡаласаҡ. Шуға күрә традицияларҙы, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе фәнни күҙлектән дә тикшерергә, уларҙы өйрәнергә кәрәк", - тине ул.

CIOFF президенты Филипп Боссан үҙенең сығышында республикала дуҫлыҡ рухы хөкөм һөрөүен билдәләне. CIOFF-тың ЮНЕСКО-лағы рәсми вәкиле Магдалена Товорник илдәр башлыҡтарының халыҡтарҙың матди булмаған мәҙәни мираҫын һаҡлауҙа ярҙам итеренә өмөт белдерҙе. "ЮНЕСКО-ның һәр ағза-иле милли мөнәсәбәттәрҙең дәүләттең эске сәйәсәтен ҡороуҙа мөһим роль уйнағанын яҡшы аңлай", - тине ул.

В. Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт Халыҡ ижады йорто директорының беренсе урынбаҫары Мери Русанова Рәсәйҙә матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлау һәм популярлаштырыу буйынса ниндәй эштәр алып барылыуы тураһында бәйән итте: "Бөгөн Рәсәйҙә 200 самаһы милләт һәм халыҡ вәкиле йәшәй һәм уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ теле, тарихы, мәҙәниәте бар. Бай этномәҙәни күп төрлөлөк ғалимдарҙың, тарихсыларҙың, этнографтарҙың, фольклорсыларҙың ғына түгел, шулай уҡ мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең, башҡарыусыларҙың, белгестәрҙең һәм традицион мәҙәниәткә ғашиҡ кешеләрҙең даими рәүештә иғтибарын һәм һаҡсыл ҡарашын талап итә. Был йәһәттән, әлбиттә, төрлө формалағы, төрлө ысулдағы дәүләт кимәлендәге ярҙам да кәрәк. Бындай ярҙамдың бер өлөшөн халыҡ ижады үҙәктәре хеҙмәткәрҙәре башҡара". Мери Вахтанговна билдәләүенсә, халыҡ-ара эшмәкәрлегендә Халыҡ ижады йорто 1999 йылдан алып РФ-ның ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһы менән хеҙмәттәшлек итә һәм 2000 йылдан ЮНЕСКО-ның ауыҙ-тел ижады шедеврҙары исемлегенә үҙ мираҫын тәҡдим итә башлай, әлеге ваҡытта уға илдең ике объекты: Байкал арьяғы семейскийҙарының традицион мәҙәниәте һәм яҡуттарҙың "Олонхо" героик эпосы ингән. Әйткәндәй, башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы ла был исемлеккә инеүгә дәғүә итеп ҡараны, әммә объектив сәбәптәр арҡаһында процесс туҡталып ҡалды.

Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, РФ-ның ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһы ҡарамағындағы матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса Рәсәй комитетының Эксперт советы рәйесе, РФА Урал төбәк бүлексәһе Пермь фәнни үҙәгенең тарих, археология һәм этнография бүлегенең этнологик тикшереүҙәр секторы мөдире Александр Черных Рәсәй халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫы объекттарын табыу, өйрәнеү һәм һаҡлау мәсьәләләре буйынса эксперттарҙың эшмәкәрлеге нимәгә нигеҙләнеүе тураһында һөйләне: "Илдең бер нисә климат һыҙатында урынлашыуы, уның территорияһының ҙурлығы мәҙәни традицияларға ҙур йоғонто яһай, - тине Александр Васильевич. - Бындай шарттарҙа бер нисә мөһим концепт барлыҡҡа килә. Уның иң тәүгеһе, әлбиттә, күп төрлөлөк. Был күп төрлөлөк йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, милли кухня, кәсепселекте һ.б. үҙ эсенә ала. Икенсе концепт: этник күп төрлөлөк, сөнки һуңғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса Рәсәйҙә 200 самаһы милләт халыҡтары йәшәй, этник төркөмдәрҙе лә ҡушһаҡ, был күрһәткес тағы ла арта. Киләһе концепт, әлбиттә, урынға бәйлелек һәм вариативлыҡ. Күп кенә объекттар милләт-ара, төбәк-ара характерға эйә. Шуға күрә бер объекттың бер нисә вариантын осратырға мөмкин. Һәм хәҙерге ваҡытта матди булмаған мәҙәни мираҫ менән эш иткәндә уларҙы табыу, һүрәтләү һәм презентациялау, каталогка индереү төп урында тора".

### Йолаларҙы тергеҙеү аңһат эш түгел

Конференцияның беренсе өлөшө халыҡ ижады үҙәктәре белгестәре өсөн кәрәкле мәғлүмәткә бай булыуы менән әһәмиәтле булһа, икенсе өлөшө ҡунаҡтар өсөн ҡыҙыҡлы булғандыр, моғайын, сөнки унда Рәсәй халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫы объекттарының бер нисәһе күрһәтелде. Ҡунаҡ ҡаршылаусы яҡ булараҡ, тәүге һүҙҙе Башҡортостан Республикаһы Халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Артур Әлибәков алды һәм ҡыҫҡаса республиканың төп брендтарына экскурс яһағандан һуң, башҡорт халҡының мәшһүр ҡобайыры - "Урал батыр" эпосы менән таныштырҙы. Ә инде Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең "Рәсәй йәне" премияһы лауреаты Асия Солтанованың, халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй конкурстары лауреаты Илһам Байбулдиндың, "Урал батыр" эпосын башҡарыу буйынса үҙенең дебют сығышын яһаған Учалы

***✓ Башҡорттарҙа ла шундай йола булғанын күрергә мөмкин, йәғни ҡыҙ күҙләү, вәғәҙәләшеү, кейәүләү, йәрәшеү. Чечендар үҙҙәренең ғаилә ҡороуға етди ҡараған йолаларын тергеҙә икән, беҙгә лә уйланырға урын бар.***

ҡыҙы Яҙгөл Нуретдинованың **(һүрәттә)** сығышы көслө алҡыштарға күмелде. Әйткәндәй, Фольклориаданы асыу тантанаһы тап "Урал батыр" эпосына нигеҙләнеп эшләнгәнлектән, ҡунаҡтарға эпостың өҙөктәрен башҡарыусыларҙан ишетеү уның асылын аңларға тағы ла нығыраҡ ярҙам иткәндер, моғайын.

В. Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт Халыҡ ижады йортоноң матди булмаған мәҙәни мираҫ секторы мөдире, филология фәндәре докторы, Славян мәҙәниәте институтының дөйөм һәм славян сәнғәте белеме кафедраһы доценты Варвара Добровольская Дағстан Республикаһының Цунтин районы Шаитли ауылында йәшәгән дидойҙарҙың (үҙатамалары - цездар) ҡышты оҙатыуға арналған Игби байрамы һәм Липецк өлкәһенең Добровский районында балсыҡтан уйынсыҡтар эшләү технологияһы тураһында һөйләне. Игби байрамы - бублик формаһында бешерелгән "иг"тың (икмәк) күплек һүҙенән килеп сыҡҡан. Байрам көнөндә ауыл уртаһына бүре кейемендәге һәм битлегендәге бер нисә егет йыйыла һәм улар 7-10 йәшлек малайҙар оҙатыуында ауылды урап сыға, юл ыңғайы һәр йортҡа инеп, унан берәр икмәк (иг) алып, уны оҙон таяҡҡа элеп, ике кеше ике яҡтан күтәреп бара. Был ваҡытта ауыл уртаһындағы майҙанда тамашасылар һәм төрлө костюмдағы (маскарад костюмдары) байрамда ҡатнашыусылар йыйыла. Игбиҙың төп персонаждарының береһе - мөһабәт Квидили. Уның буйы 2 метрға етә. Майҙанға килеп еткәс, бүреләр һәм Квидили йыйылыусыларға яңы йылда мул уңыш теләй. Тамаша көн үҙәгенә тиклем дауам итә һәм ошо көндән яҙ килә тип һанала.

Маҡсаты чечен йәштәрен таныштырыу булған Синкъерам йәмәғәт институты тураһында Чечен Республикаһының Халыҡ ижады үҙәге директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рамзан Даудов бәйән итте: "Чечен халҡының төп мәҙәни ҡиммәттәре азатлыҡ, намыҫ һәм яуаплылыҡ төшөнсәләре менән бәйле. Бөгөн беҙ ҡараясаҡ синкъерам (йолаларҙы ихтирам итеүҙе күрһәткән кисә) йолаһының төп принциптары тап шуларға нигеҙләнгән. Йәштәрҙе таныштырыу йүнәлешендә ойошторолған йәмәғәт институты унда ҡатнашыусыларҙың танышлығының артабан етди ниәттәргә килтереүен күҙаллай. Чечендар 18-се быуатта имам Шамилдың, етди демографик проблемалар арҡаһында 15 йәше тулыу менән ҡыҙҙарҙы 3 көн эсендә кейәүгә биреү тураһындағы указына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең традицияларын һаҡлап ҡала алған. Чечендар өсөн мөхәббәткә, ҡыҙҙарҙың йөрәген яулап алыуға нигеҙләнгән ғаилә төп урында тора һәм шуға күрә лә улар үҙ традицияларын һаҡлауға өлгәшә. Егеттәргә ҡыҙҙар менән икәүҙән-икәү ҡалыу, хатта ҡыҙҙарға бармаҡ осо менән ҡағылыу ҙа көс ҡулланыуға тиң булып һанала. "Ҡыҙҙарҙың намыҫы түбәнһетелгән илдә яугирҙар тыумай", - ти халыҡ аҡылы. Үҙенә оҡшаған ҡыҙҙың иғтибарын яулау өсөн егеттәр ҡыҙ яғынан да, үҙе яғынан да шаһиттар булған синкъерамда рәсми мөрәжәғәт итә алған. Синкъерам еткән ҡыҙ булған ғаиләләрҙә лә ойошторолған, был хаҡта шунда уҡ тирә-яҡҡа мәғлүм булған. Йәштәр өсөн уҙғарылған кисәләрҙә тамада һәм уның ярҙамсылары, оло йәштәге кешеләр була һәм улар йәштәргә үҙҙәренең иҫкәртеүҙәрен еткерә ала. Ҡыҙ йортона егет бер ваҡытта ла яңғыҙы килмәй, уны һәр саҡ ҡыҙ йәки ир туғандары оҙатып йөрөй. Ҡыҙҙар бындай кисәләрҙә 15 йәше тулғас ҡына ҡатнаша ала.

Кисә барған бинала, хәүеф янағанда, унан башҡаларҙы яҡлау мөмкинлеге булһын өсөн егеттәр ишек яғында урын ала, ҡыҙҙар - ишеккә ҡаршы яҡта. Алып барыусылар араһында ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет тамада була. Кисә барған йорт йәки бина хужаһы уның төп маҡсатын һәм үткәреү ваҡытын билдәләй. Әгәр егеткә ниндәйҙер ҡыҙ оҡшай икән, ул тамадаларҙың икеһенән дә (тәүҙә ир тамаданан, һуңынан ҡатын-ҡыҙ тамаданан) һөйләшеүгә рөхсәт һорай. Ҡатын-ҡыҙ тамада үтенесте ҡыҙға еткерә, әгәр егет оҡшамаһа, ҡыҙ матур ғына сәбәп табып, мәҙәниәтле генә итеп баш тарта. Егет оҡшаған осраҡта, ҡыҙ кисәлә үҙе ихтирам иткән кешеләрҙең дә ҡатнашыуын белгертә. Тәүге танышыуҙан һуң икенсе осрашыуҙа ҡыҙ егеткә иғтибар күрһәтмәй икән, был инде танышыуҙың киләсәге булмаясағын иҫкәртә. Иғтибар билдәһе булһа, уларҙың танышыуы юғарыраҡ этапҡа күтәрелә. Дүртенсе этапта ғына егет ҡыҙҙан кейәүгә сығырға ризалыҡ алырға мөмкин. Шунан һуң ғына егет барыһының да алдында ҡыҙҙың ризалығы тураһында иғлан итә һәм был вәғәҙә иман кеүек үк көслө була, сөнки вәғәҙәне боҙоу ике яҡ өсөн дә оят, ғәрлек һанала. Үҙенең ризалығын ҡыҙ ниндәйҙер бүләк биреп нығытып ҡуя", - тип һөйләне Рамзан Докаевич.

Әле хәтерҙән юйылып бөтмәгән тарих биттәренә күҙ һалһаҡ, башҡорттарҙа ла шундай йола булғанын күрергә мөмкин, йәғни ҡыҙ күҙләү, вәғәҙәләшеү, кейәүләү, йәрәшеү. Чечендар үҙҙәренең ғаилә ҡороуға етди ҡараған йолаларын тергеҙә икән, беҙгә лә уйланырға, уларҙың тәжрибәһе нигеҙендә шундай уҡ йәмәғәт институты булдырырға урын бар. Әйткәндәй, синкъерамда сәхнә өсөн ҡуйылған бейеү түгел, ә көндәлек бейеү башҡарыла һәм хәрәкәттәр аша егеттәр ҡыҙҙарға үҙенең хистәрен белдерә, йәғни бейеү-саҡырыу яһай. Конференцияла "Вайнах" бейеү ансамбле солисы шундай бейеү башҡарып та күрһәтте.

Алтай Республикаһының Халыҡ үҙәге директоры, Алтай Башлығы оркестры дирижеры Анастасия Уркунова өҙләү һәм милли музыка ҡоралдары тураһында мәғлүмәт бирһә, Алтай Республикаһының атҡаҙанған артисы, Республика Башлығы оркестрының солисы Добрыня Сатин өс төрлө характерҙағы өҙләү башҡарып, тамашасыны хайран итте. Әйткәндәй, Добрыня Владимирович Башҡортостан тамашасыһына яҡшы таныш, сөнки ул 2016 йылда үткән "Урал моңо" халыҡ-ара конкурсында Гран-приға лайыҡ була. Шулай уҡ сығыш яһаусы Алтайҙа йыл һайын сәсәндәр ҡоролтайы уҙғарылыуы һәм унда 7 йәштән алып 70 йәшкә тиклем 100 кешенең ҡатнашыуы, сәсәнлек серҙәренә төшөнөүе тураһында һөйләне. Тимәк, беҙгә был йүнәлештә лә эшләйһе эштәр бар, аныҡырағы республикалағы Сәсәндәр мәктәбе эшмәкәрлеген көсәйтергә һәм уны йыл да ҡоролтай уҙғарырлыҡ көслө, ҡеүәтле кимәлгә еткерергә кәрәк. Әйткәндәй, быйыл БДУ-ның Сибай филиалында фольклор буйынса махсус белгестәр диплом ала. Әммә улар ни бары өс кенә бөртөк...

Конференцияны ЮНЕСКО-ның матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлегенә ингән семейскийҙар мәҙәниәте тамамланы. "Судьбинушка" халыҡ этнографик ансамбленең художество етәксеһе, Бүрәт республикаһының атҡаҙанған артисы, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Галина Чебунина старообрядсылар менән таныштырҙы. Байкал аръяғында семейскийҙар 250 йыл йәшәй. Улар 17-се быуат урталарында Украина, Польша, Беларусь биләмәләренә ҡасҡан һәм 1860 йылдарҙа батша ғәскәрҙәре тарафынан кире ҡайтарылып, Байкал аръяғына һөрөлгән, үҙҙәренең мәҙәниәтен, традицияларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалған Боронғо Русь старообрядсылары. "Семейскийҙарҙың ЮНЕСКО-ның матди булмаған мәҙәни мираҫы исемлегенә инеүен, халыҡтың тирә-яғындағы, уны уратып алған мәҙәни мөхиттең баһалап бөткөһөҙ ҙур байлыҡ икәнлеген йәмғиәт аңлап бөтмәй ине әле, - ти Галина Ермолаевна. - Ғалимдарҙы, башҡа белгестәрҙе, туристарҙы йәлеп итә һәм семейскийҙарҙың мәҙәниәтен һаҡлауға йүнәлтелгән төрлө программалар ҡабул ителә башлағас ҡына халыҡ этносҡа ниндәйҙер ҡатнашлығы булыуы тураһында аңлай һәм ғорурлана башланы".

Хәҙерге семейскийҙар Бүрәт иле территорияһына 18-се быуат урталарында килеп урынлашып, крайҙың йөҙөн һиҙелерлек үҙгәртә. Бөгөн республика халҡының 1/5 өлөшөн (яҡынса 200 мең кеше) семейскийҙар алып тора. Әммә улар семейскийҙар мәҙәниәтен йөрөтмәй, сөнки совет осоронда йәштәр тамырҙарынан айырыла. Борон-борондан тарихи, мәҙәни традициялар ғаиләлә быуындан-быуынға тапшырылһа, әле килеп был күренеш бөтөнләй үҙгәргән: күсәгилешлекте тәьмин итеүселәр ролен мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, тарих уҡытыусылары, балалар баҡсалары тәрбиәселәре, йәмәғәтселәр һәм битараф булмағандар ғына үтәй һәм үҙҙәренә шундай бурыс йөкмәгән. Эш иҫтәлекле даталарҙы билдәләгәндә генә әүҙемләшеп ҡала, әммә системаға һалынған планлы, оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән эш алып барылмай. Шул уҡ ваҡытта семейскийҙар мәҙәниәтенең ЮНЕСКО исемлегенә индерелеүе уларҙы ил буйынса ғына түгел, донъя буйынса төрлө сараларға саҡырыу билеты булып та тора. Старообрядсыларҙың йырҙары донъяның төрлө илдәрендә таныла башлай, ә коллектив ағзалары урындағы интеллигенцияның алтын бағанаһына әүерелә, сөнки семейскийҙар йырҙарын башҡарыу оҫталығы бөгөн юғары урында тора һәм баһалана. Шул уҡ ваҡытта был мәҙәниәтте һаҡлаусылар туристарҙы ылыҡтырһа ла, тарихи-этнографик йәһәттән тейешенсә иғтибар йәлеп итә алмай. Хатта үҙен ошо мәҙәниәтте йөрөтөүселәр рәтенә индергәндәр ҙә, кейемдәрендәге теге йәки был элементтың нимә аңлатыуын, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, йырҙарҙың тарихын һораша башлаһаң, бер нәмә лә белмәй икәнлеге асыҡланыуын әсенеп һөйләне Галина Чебунина, ә быларҙың барыһын да хәтерендә һаҡлаған оло быуын кәмегәндән-кәмей. Заман технологиялары семейскийҙар ауылдарының да йөҙөн үҙгәртә, уларҙа семәрле ҡапҡалар, тәҙрә ҡапҡастары һ.б. милли мәҙәниәт элементтары юғала бара. "Мәсьәләне хәл итеү өсөн семейскийҙар йәшәгән һәр районда мәҙәни үҙәктәр булдырырға кәрәк. Унда теләге булған һәр кем белем алһын, быуындан-быуынға һаҡланып килгән милли кәсепселек оҫталығы серҙәрен, тарихты һәм йыр мәҙәниәтен һ.б. өйрәнһен", - тине сығыш яһаусы.

Шулай итеп, Рәсәйҙең күп төбәктәре һәм мәҙәниәттәре өсөн таныш күренештәр һәм проблемалар, ҡасандыр ил башлығы "Башҡортостанда, һыу тамсыһындағылай, тотош Рәсәй сағыла", тигәндәй, айырым төбәктәрҙә тотош илгә хас булған проблемалар сағылыш таба. Сөнки беҙгә, семейскийҙар күп тауышҡа башҡарған йырҙар кеүек, күп төрлөлөк хас. Һәм һәр мәҙәниәт үҙенә айырым ҡараш талап итә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Шәхси тормошонда - бәхет һәм уңыш

Беҙ барлыҡ киңлекте тултырыусы энергетик мөхиттә йәшәйбеҙ. Уға ҡарата минең ике яңылығым бар: береһе - яҡшы, икенсеһе - насар. Яҡшыһы шунан ғибәрәт - ғалимдар Аллаһты тапты. Насары - улар Уны танырға теләмәне. Ғәмәлдә был Энергия һәр тормоштоң сығанағы булып тора һәм материяның һәр атомында йәшәй.

Ғалимдарҙың Уны нисек атауы мөһим түгел. Уның аң, аҡыл кәүҙәләнеше булыуы мөһим. Был билдәләмә - беҙҙең Ижадсыға, Булдырыусыға яҡынайыуыбыҙҙың мөмкин булған иң юғары дәрәжәһе. Тап шул аң ғаләм менән идара итә.

Ошо уҡ аң беҙҙе лә хәрәкәтләндерә. Бынан тыш, ул беҙҙең аңыбыҙ менән берләшеп, һәләттәребеҙҙе, һиҙемләүҙәребеҙҙе барлыҡҡа килтерә, идеялар бирә, илһамландыра.

Ҡарашы дөйөм ғаләмдекенә яҡыныраҡ булыусылар аң кәүҙәләнешен нығыраҡ тарта. Тәбиғәткә яҡын булыусылар тере йән эйәләренә ихтирамлы була. Матди донъяның йәшәү сығанағы түгеллеген, ә ошо сығанаҡтың ижад өлкәһендә, тимәк, рухиәттә булыуын аңлаусыларҙың тормошта бәхетле икәненә шик юҡ.

Бер нисә йыл элек мин Грецияла, боронғо емереклектәрҙә ҡаҙыныу эштәре барған урында булдым. Ер аҫтынан ниндәйҙер бер өлөшө генә сығып торған, ҡалғаны ер аҫтында ҡалған бина, археологтар фекеренсә, дауахана кеүек урын булған. Көндөҙ бында ауырыуҙар дауалаусылар тәғәйенләгән процедураларҙы алған. Дауалау төнөн дә дауам иткән - ауырыуҙарҙың карауатына дауалаусыларҙың бүлмәһенә тоташтарылған торбалар беркетелгән. Улар аша төнөн дауалаусылар ауырыуҙарға ыңғай йоғонто яһаған: мәҫәлән, "һиңә көндән-көн яҡшыраҡ", "дарыу тәьҫир итеп, һинән ауырыуҙы ҡыуып сығара" тигән һүҙҙәрен еткергән.

Тән менән идара итеүсе аңға йоҡлағанда ғына түгел, уяу килеш тә барып етеп була. Был ошо главала яҙылған барлыҡ психологик йүнәлештәр өсөн төп шарт булып тора.

50-се йылдарҙа уҡ доктор Хорнелл Харт, Дьюк университеты профессоры "автокондиционерлау" тип аталған методика тәҡдим итә. Был ысул кире уйҙарҙы ыңғайға үҙгәртә. Ул үҙ эсенә ике стадияны ала:

- Аңдың һәм тәндең көсһөҙләнеүе.
- Үҙ-үҙеңде ыңғай ҡарашҡа һәм конструктив ҡылыҡтар ҡылыуға инандырыу.

Шунан алып шул уҡ проблеманы хәл итеүҙең бер нисә юлы тәҡдим ителә, атап әйткәндә, гипноз һәм үҙ-үҙеңде гипнозлау. Шулай итеп, француз ғалимы Эмиль Куэ арҡаһында ике ҡитғалағы меңдәрсә кеше көҙгөгә ҡарап: "Бар мөнәсәбәттәрҙә лә мин көндән-көн яҡшырғандан яҡшыра барам", - тип ҡабатлаған.

Куэ үҙ-үҙеңде ышандырыуға этәргес бирә. Егерме биш йыл элек ул Сильва ысулы - сәләмәтлегеңде нығытыу, тормошта уңыш ҡаҙаныу һәм проблемалар алдында ебеп төшмәү маҡсатында үҙ аңың менән идара итеү ысулы - исемен алған дүрт көнлөк тренинг булып ойоша. Бөтә был ысулдар ҙа атап үтелгән стадияларҙы үҙ эсенә ала. Ни өсөн? Сөнки улар эшләй.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 12 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.40, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 4.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Старушки в бегах". Новые серии. [12+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Московский роман". [12+]
1.00 Т/с "Торгсин". [16+]
3.05 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 22.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**10.45, 17.15 Дневник VI Всемирной Фольклориады-2021. [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 23.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 4.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**19.55 Футбол. ФК "Уфа" - ФК "Виктория Пльзень". Чехия. Контрольный матч в Австрии.**
**22.30 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Следы на воде". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 13 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Старушки в бегах". Новые серии. [12+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Московский роман". [12+]
1.00 Т/с "Торгсин". [16+]
3.05 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости. .**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Путевка в жизнь". По окончании: Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Зятек". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 14 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Старушки в бегах". Новые серии. [12+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Московский роман". [12+]
1.00 Т/с "Торгсин". [16+]
3.05 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 Автограф. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Тум-Паби-Дум". По окончании: Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 15 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Старушки в бегах". Новые серии. [12+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Московский роман". [12+]
1.00 Т/с "Торгсин". [16+]
3.05 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Берешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости.**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Т/с "Сируси". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "С Дона выдачи нет". По окончании: Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**5.15 Преград. Net. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 16 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.15 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.45 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Музыкальный фестиваль "Жара". Открытие. Гала-концерт. [12+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.35 Д/ф "Том Круз: Вечная молодость". [16+]
1.35 Наедине со всеми. [16+]
5.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00 -

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Косатка". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Московский роман". [12+]
0.50 Торжественная церемония открытия XXX Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
3.00 Х/ф "Поддубный". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 "Легенды космоса". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Навруз". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Х/ф "Вечный лес". [12+]**
**0.00 Х/ф "Личный номер". По окончании: Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.30 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 17 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 "Честное слово". Ко дню рождения Пелагеи. [12+]
14.45 Концерт Пелагеи "Вишневый сад". [12+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 Д/ф "Тульский Токарев. Он же ТТ". [16+]
18.50 Сегодня вечером. [16+]
20.30 Время.
20.50 Олимп-Суперкубок России по футболу. "Зенит" (Санкт-Петербург) - "Локомотив" (Москва). Прямой эфир из Калининграда.
23.00 Х/ф "Испытание невиновностью". [16+]
0.45 Юбилей группы "Цветы" в Кремле. [12+]
2.35 Модный приговор. [6+]
3.25 Давай поженимся! [16+]
4.05 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Чужое счастье". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Замок на песке". [12+]
1.05 Х/ф "Цена любви". [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Байтус". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башҡорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Ришата Хамитова. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Не игра". [16+]**
**2.45 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**4.00 Автограф. [12+]**
**4.30 Детей много не бывает. [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 18 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф Премьера. "Суровое море России". [12+]
15.45 Д/ф "У моего ангела есть имя". К 65-летию Любови Казарновской. [12+]
16.40 Д/ф "Григорий Лепс. По наклонной вверх". [12+]
17.35 Премьера. Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". "Григорий Лепс собирает друзей". [12+]
19.15 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.45 Х/ф "Испытание невиновностью". [16+]
1.25 Наедине со всеми. [16+]
2.10 Модный приговор. [6+]
3.00 Давай поженимся! [16+]
3.40 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.25, 1.00 Х/ф "Жених". [16+]
6.00, 2.40 Х/ф "Тариф "Счастливая семья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
14.00 Т/с "Чужое счастье". [12+]
18.00 Х/ф "Закон сохранения любви". [12+]
20.00 Вести.
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "В гостях у Акбузата". Репортаж с Республиканского фестиваля детского и юношеского творчества. [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Берешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Посмотрим... [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Йырҙарҙа йылдар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**
**18.45 Автограф. [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.30 Х/ф "Последние пять лет". [16+]**
**1.15 Спектакль "Последние". [12+]**
**3.15 "Млечный путь". [12+]**


В соответствии со статьей 64 Федерального закона от 22 февраля 2014 года №20-ФЗ "О выборах депутатов Государственной Думы Федерального Собрания Российской Федерации" и частью 6 статьи 63 Кодекса Республики Башкортостан о выборах Муниципальное бюджетное учреждение "Издательский дом "Уфа" городского округа город Уфа Республики Башкортостан уведомляет Центральную избирательную комиссию Республики Башкортостан о предоставлении в газетах "Уфимские ведомости", "Вечерняя Уфа", "Уфимская неделя", "Киске Өфө" и на сайтах http://pressaufa.ru https://ufaved.info площади на платной основе для проведения предвыборной агитации зарегистрированных кандидатов, избирательных объединений, участвующих в Выборах депутатов Государственной Думы Федерального Собрания Российской Федерации восьмого созыва, Дополнительных выборах депутатов Государственного Собрания - Курултая Республики Башкортостан шестого созыва, в выборах депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва, которые состоятся 19 сентября 2021 года.

| Площадь публикации | Стоимость (руб., в т. ч. 20% ндс) |
|---|---|
| ¼ А3 | **15 000**,00 |
| ½ А3 | **30 000**,00 |
| 1/1 А3 | **60 000**,00 |
| http://pressaufa.ru https://ufaved.info | **25 000**,00 |

**Обращаться по адресу:**
г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13, каб. 311. Тел.: (347) 272-89-09, 273-35-92. vureklama2007@mail.ru

**Юридический адрес:**
450005, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Революционная, д.167/1, цокольный этаж.

Реклама


## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1442 һижри йыл.***

| Июль (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (2) дүшәмбе | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |
| 13 (3) шишәмбе | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (4) шаршамбы | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (5) кесе йома | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (6) йома | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |
| 17 (7) шәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |
| 18 (8) йәкшәмбе | 3:35 | 5:05 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

*✓ Сир билдәләре башлыса сәскә тажы һулыуынан, кибеүенән ғибәрәт. Сәскә атмайынса бөрөләнгән ваҡытта уҡ ҡарайыуы ла ихтимал. Йәш ботаҡтар һутҡа тулыша ла, бер аҙҙан тамсылап аға башлай һәм тиҙҙән ҡорой.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ ЭПОСТАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Хотол. Сямисэн. Ситар. Бонни. Агого. Шиялтыш. Волынка. Агапа. Рычков. Театр. Дин. Океан. Тибр. Әй. Сапан. Ант. Лего. Хоккей. Ҡурай. Әлеге. Әҙәм. Ун.

**Вертикаль буйынса:** Валторна. Балалайка. Нәшриәт. Саян. Хикәйә. Ишара. Хомус. Дудук. Каягым. Тел. Кантеле. Ейән. Нур. Көн. Аша. Орсоҡ. Грек. Пипа. Оса. Нәнәй.

ИҪКӘРТЕҮ

# ЕМЕШҺЕҘ ҠАЛМАЙЫҠ



**Башҡортостан баҡсасыларын емеш ағастарына ауырыу янауы тураһында иҫкәртәләр.**

Ул уңышты ғына кәметмәй, ә алма, груша, виноград, ҡарағат, миләш һәм башҡа емеш ағастарының күпләп ҡороуына сәбәпсе булыуы ихтимал. Россельхознадзорҙың төбәк идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, бүлек инспекторҙары йыл һайын яҙғы-йәйге осорҙа республика биләмәһендә сирҙәрҙе алдан асыҡлау маҡсатында емеш ағастары питомниктарында тикшереү үткәрә. Эксперттар билдәләүенсә, ауырыуҙың Башҡортостан биләмәһенә үтеп инеү хәүефе ҙур. Шуға күрә баҡсасыларға даими рәүештә ағас һәм ҡыуаҡтарҙы тикшерергә кәңәш итә.

Сир билдәләре башлыса сәскә тажы һулыуынан, кибеүенән ғибәрәт. Сәскә атмайынса бөрөләнгән ваҡытта уҡ ҡарайыуы ла ихтимал. Йәш ботаҡтар һутҡа тулыша ла, бер аҙҙан тамсылап аға башлай һәм тиҙҙән ҡорой. Шулай уҡ осо ырғаҡҡа оҡшап, кәкерәйергә һәм кибергә лә мөмкин. Ауырыу ағастың япрағы ҡарая, йомарлана, әммә ҡойолмай. Сир таралмаһын өсөн республика халҡы емеш ағастарын, ҡыуаҡтарын тикшереп торорға, сир билдәләрен тапҡан осраҡта Өфө ҡалаһы, Урман тыҡрығы (Лесной проезд), 1 адресы буйынса мөрәжәғәт итергә тейеш, тип хәбәр итте ведомствоның мәғлүмәт хеҙмәте.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# КӨТӨҮСЕ МУҠСАҺЫ

**Көтөүсе муҡсаһының ҡанауҙы туҡтатырлыҡ көсө электән билдәле. Заманында Гиппократ та уны аналыҡты дауалағанда ҡулланған. Халыҡ дауаһында көтөүсе муҡсаһы үләнен һәм унан алынған һутты үпкә, ашҡаҙан-эсәктән ҡан ағыуҙы туҡтатыу өсөн файҙаланалар.**

Ҡатын-ҡыҙҙың ырыуҙан ҡалыуға бәйле организмында барған үҙгәрештәр ваҡытында килгән ҡанды, оҙайлы һәм ауырттырып килгән күрем, иң мөһиме - бала төшкәндә был үлән алыштырғыһыҙ ярҙамсы. Йөклөлөк ҡабаттан өҙөлмәһен өсөн 2-3 ай тирәһе көтөүсе муҡсаһы бешерелгән һыу эсергә кәрәк. Бынан тыш үләнде ҡатын-ҡыҙҙың енси ағзалары эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн ҡулланалар. Янбаш диафрагмаһы, аналыҡтың тарамыштары йәки уның мускулдары көсһеҙләнгәндә көтөүсе муҡсаһынан әҙерләнгән сәй йәки төнәтмә ярҙам итә.

Был үләнде сәскә атҡан осорҙа йыйыу кәрәк, ә көтөүсе муҡсаһы йәй дауамында бөрөләнеп, сәскә атып, емеш биреп ултыра. Көтөүсе муҡсаһы үләнен йыйып һаҡлауҙың үҙ нескәлектәре бар. Эш шунда: үҫемлек һәр ваҡыт ниндәйҙер аҡ бәшмәк менән ҡапланған була, йәки был онло ысыҡмы икән, билдәһеҙ. Әммә тап бына ошо аҡ бәшмәк үҫешенең һуңғы осоронда ғына күҙгә күренмәле була, алдан ул үҫемлеккә төшкән булһа ла беленмәй. Бәшмәк көтөүсе үләнендәге шифалы матдәләрҙең көсөн ниндәйҙер кимәлдә кәметеүгә көн кеүек асыҡ. Әлбиттә, аҡ "он" менән ҡапланған үләнде береһе лә йыймай, әммә бәшмәк әле үҙен белдереп өлгөрмәгәндә йыйылған үләнде ентекле ҡарап, профилактика өсөн 1-2 көнгә ҡояшҡа элеп ҡуйырға кәрәк. Әгәр ҙә үҫемлек таҙа һәм йәшел булып ҡалһа, ҡыйыу рәүештә күләгәгә киптерергә элеп, юғары сифатлы әҙерләмә алырға була.

Көтөүсе муҡсаһы үләнен ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуын ғына түгел, бөйөр, бауыр сирҙәрен, юғары ҡан баҫымы, яман язвалар һәм ашҡаҙан яман шеше, шештәр, аналыҡ фибромаһын дауалау өсөн дә ҡулланырға була. Араҡыла төнәтелгән үләнде ашҡаҙан язваһынан эсәләр.

**Бауыр һәм бөйөр ауырыуҙары.** Йәйгеһен яңы үләндең һутын һығып алып, 40 тамсыһына яртылаш һыу ҡушып көнөнә 3 тапҡыр эсәләр. Ҡышҡыға ҡарай һутҡа яртылаш араҡы ҡушып, консервалап ҡуйырға һәм һыуға 30-40 тамсы тамыҙып эсергә була. Йәки 40-50 грамм киптерелгән үләнгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә һәм йылымыс көйөнсә көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә кәрәк.

**Бәүел тотмау.** 3 ҡалаҡ үләнде термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 3-4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

**Аналыҡтан ҡан килгәндә.** 2-3 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябып 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3-әр стакан эсергә. Ғәҙәттә бер-ике көндән ҡан килеүҙән туҡтай, әммә төнәтмәне тағы ла ике көн тирәһе көнөнә бер тапҡыр иртәнсәк йә кискә эсеүҙе дауам итергә кәрәк.

**Стресс.** Яңы һығылған 40-50 тамсы һутты һыуға тамыҙып көнөнә 3 тапҡыр эсеп алырға.

**Юғары ҡан баҫымы.** Быяла банканың өстән ике өлөшөнә тиклем көтөүсе муҡсаһы үләнен һалырға, шунан өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойорға. 2 аҙнанан һуң был төнәтмәне ҡуллана башларға, ә бер айҙан уны һөҙөп, үләнен һығып алып ташларға мөмкин. 25-30 тамсы дауаны 1 ҡалаҡ һыуға иҙеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда эсергә кәрәк. Оҙайлы осор ҡулланырға була.

Көтөүсе муҡсаһы ағыулы үлән түгел, уның япраҡтарын салат, щи, бәлеш әҙерләгәндә ҡулланырға мөмкин. Әммә башҡа төрлө тәьҫир итеүе лә бар. Уны ҡандың ойошоусанлығы юғары булғанда һаҡ ҡулланырға кәрәк, айырыуса оҙайлы дауаланғанда ҡандағы протромбин кимәлен күҙәтеп торорға. Көтөүсе муҡсаһынан әҙерләнгән шифаны күрем килгәндә ҡан бик наҡыҫ булған осраҡта ла файҙаланыу ярамай. Ҡан баҫымы түбән булһа, бер нисә көндән артыҡ ҡулланмаҫҡа. Йөклө саҡта, хатта ҡан килеүен туҡтатыу маҡсатында ла, көтөүсе муҡсаһынан әҙерләнгән төнәтмәне эсмәҫкә.

✓ *Ул башҡорт милли кейемдәрендә лә болгар халҡыныҡына оҡшаш мотивтар булыуын, Бургас ҡалаһы тирәһендәге болгарҙарҙыҡы кеүек тәңкәле биҙәүестәр барлығын күреүе хаҡында ла һөйләнә.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДОНЪЯ ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ БЕРЛӘШЕҮ ҺӘМ...

## – мәҙәни мираҫы менән уртаҡлашыу өлгөһө был!



(Башы 1-се, 6-сы биттәрҙә).

### Ижад эштәренән күргәҙмә

VI Бөтә донъя фольклориадаһының икенсе көнөнә БР Милли музейында "Донъя халыҡтары битлектәре" һәм "Донъя халыҡтары уйын ҡоралдары" халыҡ-ара күргәҙмәләре асылды. Тәүгеһенә төрлө илдәрҙең вәкилдәре үҙ экспонаттарын алып килһә, икенсеһендә милли уйын ҡоралдарының фотоһүрәттәрен ҡарау мөмкинлеге булды. Шул уҡ ваҡытта "Торатау" конгресс-холы эргәһендәге киң майҙанда "Фольклориада йөрәге" Халыҡ-ара кәсептәр һәм һөнәрҙәр күргәҙмәһе лә эш башланы. Бында урындағы оҫталарҙың ҡул эштәре һәм сит ил вәкилдәренең үҙенсәлекле әйберҙәре урын алды. Ҡырғыҙстан, Эстония, Болгария, Италия, Америка Ҡушма Штаттары, Беларусь, Хорватия, Черногория, Перу, Албания, Камерун, Индонезия, Эквадор, Коста-Рика, Колумбия, Мексика, Венгрия илдәренең һәм Рәсәйҙең данын яҡлап сыҡҡан Башҡортостан һөнәрселәренең оҫталығын баһалай алдыҡ.

Ҡырғыҙстандан килгән Гөләй Джандралиева үҙе 70-тән уҙған булһа ла, донъялағы эпидемиологик хәлгә ҡарамаҫтан, туғандаш халыҡ еренә башлап килеүенә һөйөнөп бөтә алмауын белдерҙе. Ҡырғыҙ оҫтабикәләренең күндән, кейеҙҙән эшләнгән тирмә ҡаралдылары, ағас һәм металдан яһалған әйберҙәрен сығарған улар күргәҙмәгә. "Кисәге Фольклориаданы асыу тантанаһы иҫ киткес булды! Бынан тыш, Өфө ҡалаһының таҙа, матур, яңы төҙөлөш урындары күп булыуын аңғарҙым. Әммә иң тәьҫирләндергәне - Салауат Юлаев һәйкәле", - ти Гөләй ханым.

Ә бына Болгариянан Галина Парванова **(һүрәттә)** күҙҙең яуын алырлыҡ иҫ киткес нағышлы әйберҙәр алып килгәйне: "Мине бәләкәйҙән өләсәйем сигергә өйрәтте. Башта ниңә был эш менән шөғөлләнергә тейешлегемде аңламай торғайным, уйнарға сыҡҡым килә ине. Өләсәйем һәр нағыштың асылын аңлатҡас ҡына ҡыҙыҡһынып киттем. Әтәсһынын сиккәндә өләсәйем: "Яңы көн тыуыуын аңғартып тора, ҡояшты саҡыра", - ти торғайны һәм мин шуны күҙ алдыма килтерәм. Ә бына был ике ҡатлы сатраш - "эльбетица" - ҡояш символы. Беҙҙең һәр төбәктең үҙенә генә хас нағышы бар, мәҫәлән, Плевен яғындағы ҡайыу үрнәге был күлдәк иҙеүенә сигелгән. Борон ҡатын-ҡыҙҙар сиккәндә тирә-яҡ мөхитте, дини инаныстарын һәм донъяға ҡараштарын сағылдырған. Мин үҙем банк хеҙмәткәре, "Пламаче" ансамблендә шөғөлләнгән балаларға, апайым һәм ағайымдың ҡыҙҙарына ошо оҫталығымды өйрәтеп ҡалдырырға тырышам. Хәҙерге балалар бөтә мәғлүмәтте интернет аша алырға күнеккән. Алдарына баҫып һөйләп, эшләп торһаң, аңлап етмәйҙәр, ә алдан махсус видео яҙҙырып, телефон аша күрһәтһәң - төшөнәләр. Ғәжәйеп заман", - тип һөйләй Галина Парванова. Ул башҡорт милли кейемдәрендә, күргәҙмәгә ҡуйылған әйберҙәрҙәге нағыштар араһында ла болгар халҡыныҡына оҡшаш мотивтар булыуын, Бургас ҡалаһы тирәһендәге болгарҙарҙыҡы кеүек тәңкәле биҙәүестәр барлығын күреүе хаҡында ла һөйләне һәм был оҡшашлыҡтар беҙҙе яҡынайта, тип өҫтәне.

Күргәҙмәлә ҡумыҙ, ҡурай, хорваттарҙың боронғо ҡыуыҡлы һорнайы моңо яңғырап торҙо. Венгр һөнәрселәре телләгән һәр кемгә күндән беләҙек эшләргә, итальяндар ағас битлек юнырға, башҡорттар балаҫ һуғыу, ҡурай эшләү һәм башҡа оҫталыҡтарға өйрәтте. Ҡунаҡтар "Мосафир" күн әйберҙәр оҫтаханаһы, "Бикбайман" студияһы, Ренат Юнысовтың һәм Алексей Филипповтың башҡорт донъяһын сағылдырған үҙенсәлекле магнит сувенирҙарын, башҡорт милли кейемдәре теҙелгән рәттәрҙән үҙҙәренә иҫтәлеккә әйберҙәр һатып алды. Өфөләр ҙә үҙ сиратында сит ил һөнәрселәренең ҡул эштәрен иғтибарһыҙ ҡалдырманы: төрлө беләҙектәр, кәпәстәр, сигеүле ҡулъяулыҡтар, эшләпәләр үҙ хужаларын тапты.

Күргәҙмәне асҡанда Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова телмәр тотоп: "Бында һеҙгә үҙегеҙ менән һәр халыҡтың күңел зауҡын сағылдырған бер өлөштө алып ҡайтыу мөмкинлеге бирелә", - тигәйне. Ысынлап та шулай булды ла: мәҙәниәттәр, кәсептәр, телдәр, хатта аҡсалар ҙа төрлө булһа ла, һәр кем ым-ишара менән булһа ла аңлашып, тәжрибә уртаҡлаша, күңеленә ятҡанды ҡулға төшөрә алды. Әйткәндәй, был күргәҙмәләр артабан Фольклориада барған райондар буйлап таралды.

### Әйлән-бәйләндә өйөрөлдөләр

VI Бөтә донъя фольклориадаһының мәҙәниәт буйынса конференцияһындағы етди һөйләшеү, кәсепселәр күргәҙмәһен асыу тантанаһы тамамланып, бер аҙ ваҡыт үткәс, бөтә ҡатнашыусылар Өфөнөң Ә.-З. Вәлиди урамының М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры тирәһенә йыйналды. Тап ошо урындан милли кейемдәрҙәге ҙур парад старт алды. Фольклориадала ҡатнашҡан илдәрҙең ижади төркөмдәре үҙ милли кейемдәрендә, үҙ көйөнә, үҙ бейеүҙәрен башҡарып, "Ватан" этно-паркына тиклем уҙҙы һәм ҙур әйлән-бәйләндә өйөрөлдө. Был әйлән-бәйлән ҡатнашыусылар һаны буйынса ла, 57 ил вәкиле ҡатнашыуы менән дә донъя рекордын ҡуйҙы.

- Парадта 2700-ҙән ашыу кеше, әйлән-бәйләндә 71 милләт вәкилдәре ҡатнашты. Ошолайтып, ике донъя рекорды ҡуйылды. Беҙ 57 ҡатнашыусы илде теркәгәйнек, беҙгә 37 ил вәкиле килде һәм Рәсәй үҙе ҡушылды. Әммә Башҡортостанда ла сит ил кешеләре йәшәүе иҫәпкә алынды, улар сит илдән булыуҙарын раҫланы һәм беҙ донъя рекордын ҡуйҙыҡ, - тине был хаҡта Башҡортостандың мәҙәни саралары дирекцияһы етәксеһе Гөлнара Юрина.

Артабан өфөләр Кубань казак хоры, "Вайнах" чечен дәүләт бейеү ансамбле, Рәсәйҙең халыҡ артисы Надежда Бабкина һәм "Русская песня" ансамбле, яҡут ҡумыҙсыһы Олена Уутайҙың сағыу, дәртле сығыштарын ҡараны. Ә бына "Гжель" Мәскәү бейеү театры һәм Үзбәкстан артистары сәхнәгә күтәрелмәне: уларҙа коронавирус менән сирләүсе барлығы асыҡланды һәм коллективтар карантинға ябылды. Ғөмүмән, Фольклориадала бөтә санитар-эпидемиологик талаптар теүәл үтәлде, ҡатнашыусы ил вәкилдәренең дә, урындағы халыҡтың да һаулығы ныҡлы контроль аҫтында булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле һөйләнгәндәр VI Бөтә донъя фольклориадаһының ике көнө ваҡиғалары тураһында булды. Байрам артабан алдан билдәләнгән "Үҙәк", "Төньяҡ", "Төньяҡ-көнбайыш" һәм "Көнсығыш" фестиваль округтарында дауам итте. Ә Өфөнөң "Торатау" конгресс-холы эргәһендәге сәхнәләрендә көн һайын "Үҙәк" округына тәғәйенләнгән илдәрҙең ижади коллективтары, махсус саҡырылған Рәсәй артистары сығыш яһаны.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯЛҒАНСЫНЫҢ...

## шаһиты янда була

Ишленең мең ғәйебе йыуылыр, яңғыҙҙың бер хатаһы мең булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тел торошона ҡарап был телдә һөйләшеүсе халыҡтың нисек йәшәүен аңларға була.

**(Хулио Кортасар).**

Кешеләрҙең бер-береһенә таш ташлауын һүгенеү һәм әр һүҙҙәре менән алыштырған тәүге кеше цивилизацияны ижад итеүсе булған.

**(Зигмунд Фрейд).**

Тормош эре планда ҡарағанда - трагедия, йыраҡтан ҡарағанда - комедия.

**(Чарли Чаплин).**

Ни тиклем күберәк үҙгәргән һайын, шул тиклем күберәк бөтәһе лә иҫкесә ҡала.

**(Француз мәҡәле).**

Белем аҡылды алыштыра алмай.

**(Пифагор).**

Әгәр ҙә кемдер белем тауының иң юғарғы баҫҡысында торам, тип иҫәпләй икән, тимәк, ул әле белем тауының иң аҫҡы баҫҡысында ғына.

**(Солонон Рысинский).**

Аҡылһыҙҙар менән идара итеүгә ҙур аҡыл, наҙандар менән идара итеүгә ҙур белем кәрәкмәй.

**(Эстебан де Эсмир).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Яҙыу өҫтәлендә бер өйөм таҙа ҡағыҙ биттәре ята. Ләкин берҙән-бер көндө кемдер бер ҡағыҙ битен алып, уны арҡыры-буйға һыҙғылап, һүрәттәр төшөрөп, нимәләрҙер яҙғылап һалып ҡуя.**

**- Ниңә һин мине шундай мыҫҡыллауҙарға дусар иттең? - тип һорай йәне әрнеп ҡағыҙ бите ҡәләмдән. - Минең аҡ ҡына йөҙөмдө һин ҡара буяуың менән бысраттың. Хәҙер мин кемгә кәрәк булам инде?..**

**- Улай уҡ борсолма әле һин, - ти уға ҡәләм. - Һине берәү ҙә мыҫҡыл итмәне һәм бысратманы ла, ә яҙыуҙар ярҙамында кәрәкле мәғлүмәттәр теркәне, һүрәттәр яһаны. Хәҙер һин ябай ғына ҡағыҙ киҫәге түгел, ә кешенең аҡылын, фекерен һаҡлаусы - ошонда инде һинең бөтөн ҡиммәтең...**

**Ҡәләм хаҡлы булып сыға. Эш өҫтәлен йыйыштырған саҡта кеше ваҡыт үтеү менән һарғайған таҙа ҡағыҙ биттәрен күреп ҡала һәм йыйып алып, уларҙы мейескә ырғытырға итә. Шул саҡта ҡағыҙ өйөмө араһында баяғы ниндәйҙер яҙыуҙар яҙылған, һүрәттәр төшөрөлгәнен күреп ҡала һәм уны башҡаларынан айырып алып, һаҡ ҡына өҫтәл тартмаһына һалып ҡуя. Кеше аҡылын һаҡлаған ҡағыҙ шулай юҡ ителеүҙән ҡотолоп ҡала..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21028

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
9 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3250
Заказ - 743